ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

16-22 май (һабанай)

2025

№19 (1163)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 995 һум 76 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәткеле менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тәртипһеҙ баланы…

ауыҙлыҡлау сараһы тураһында баш ваталар

2-3

Еңеү парады

5

Атайым халҡына һәм үҙенә…

мәңгелек һәйкәл ҡойҙо

8-9

Матурлыҡ - күңелебеҙ торошо



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

КӨН ВАҠИҒАҺЫ

ТУҒАН ТЕЛГӘ ҺӨЙӨҮ…

ғаиләнән дә, мәктәптән дә башлана

Өфөнөң башҡорт теле уҡытыусылары

Ошо көндәрҙә Өфөлә тағы бер оло йыйын - Башҡорт теле уҡытыусыларының II Бөтә Рәсәй съезы үтте. Унда әйтелгән төп фекерҙәр һәм һөйләшеүҙәрҙең һөҙөмтәләре тураһында бер кәлимә һүҙ.

Быйыл съезда Башҡортостан һәм Татарстан республикаларының, Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Свердловск өлкәләренең, Ханты-Манси автономиялы округы, Ҡазағстандан килгән мәктәп, балалар баҡсаһы, юғары һәм һөнәри белем биреү ойошмаларының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Улар "Аҡбуҙат", "Гөлөстан", "Һомай", "Иҙел", "Самрау", "Урал батыр", "Шүлгән", "Аҫылташ", "Йәншишмә" тип һәр кемебеҙҙең ҡолағына ятышлы нарыҡланған майҙансыҡтарҙа фекер алышты. Унда башҡорт телен балалар баҡсаһында өйрәнеү, уҡытыу методикаһы, цифрлаштырыу, йәш педагогтарға ярҙам итеү, балаларҙы китап уҡыуға һәм башҡорт әҙәбиәтенә ылыҡтырыу, башҡорт теле һәм Башҡортостан тарихы дәрестәрендә илһөйәрлек тәрбиәләү, полилингваль белем биреү, Башҡортостандың мәҙәниәте һәм тарихы, дәүләт алып барған тел сәйәсәте темалары күтәрелде. Һәр майҙансыҡта сығыш яһаусылар үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты, ҡыҙыу фекер алышыу һәм аралашыу барҙы. Төп һәм барыһы өсөн дә мөһим һорауҙар, тәҡдимдәр йыйындың йомғаҡлау өлөшөндә яңғыратылды һәм һәр береһе буйынса Башҡортостан Башлығының яуабы, аңлатмаһы алынды.

Өфө ҡалаһының 18-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, "Иң яҡшы туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы-2024" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүсеһе Әлиә Ишдәүләтова, мәҫәлән, "Аҡбуҙат" проекты селтәрен индереү кәрәклеге тураһында һөйләне. ***"Әлеге көндә был мәғариф программаһы Башҡортостан Башлығы гранттар фонды ярҙамында Өфөнөң 5 балалар баҡсаһында бойомға ашырыла. Ул ете модулдән тора һәм башҡортса һөйләшергә, атай-әсәйҙәрҙе йәлеп итергә, башҡорт фольклоры, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса белемдәрен арттырырға ярҙам итә. Проект атамаһы "Урал батыр" эпосынан алынған. Балаларҙы уның өлгөһөндә тәрбиәләү мөһим тип иҫәпләйем, барлыҡ муниципалитеттарҙа ла "Аҡбуҙат" проектын бойомға ашырырға кәрәк",*** - тине съездың йомғаҡлау өлөшөндә сығыш яһап Әлиә Риза ҡыҙы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был тәҡдимде хупланы һәм уның буйынса эште республиканың Мәғариф министрлығына йөкмәтте.

Йәш педагогтарҙы һәм буласаҡ уҡытыусыларҙы бергә туплау, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн йәйге педагогик кәңәшмә уҙғарыу мөмкинлеген ҡарау мәсьәләһе лә күтәрелде. Был турала "Смарт" Республика полилингваль күп профилле гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Наҙгөл Хәбибуллина телгә алды. Йәш педагог быйыл республикалағы төп һөнәри конкурста еңеүсе лә булғайны, бик илһамланып телмәр тотто һәм "Туған телдәр буйынса иң яҡшы методист" тигән республика конкурсы үткәреү ҙә маҡсатлы булыр ине, тигән фекер еткерҙе. Республика етәксеһе йәш белгестәрҙе туплаясаҡ йәйге кәңәшмәне шунда уҡ хупланы.

Китап уҡыуға һәм башҡорт әҙәбиәтенә йәш быуындың иғтибарын арттырыу өсөн бик күп саралар күрелеүен беләбеҙ, әммә өлгәшелгәндә туҡтап ҡалырға ярамай. Шуға Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Фән, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса комитеты рәйесе Айбулат Хажиндың тәкдимен барыһы ла дәррәү хупланы. Ул балалар араһында яҙыусылыҡҡа һәләте булған балаларҙы билдәләү һәм уларға ярҙам итеүгә йүнәлтелгән республика конкурсы ойоштороргға, еңеүселәрен илдең алдынғы вуздарына маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға ебәрергә кәрәк, тине. "Әйҙәгеҙ был конкурсты телгә бәйле берәй мөһим датаға арнап үткәрәйек. Беҙ вуздар менән маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡытыу мәсьәләһен ҡарарға әҙер. Кәрәк булһа, талантлы йәштәрҙе уҡытыуға финанс йәһәтенән дә ярҙам итергә булыр", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Илһөйәрлек һәм ватансылыҡ темалары ла съездың үҙәгендә булды. Бында "Шаймораторов кластары" проектының әһәмиәте, һөҙөмтәләре тураһында һөйләнеләр һәм ошо кластарҙа уҡыған балаларҙа 9-сынан һуң махсус таныҡлыҡтар тапшырыу яйын ҡарарға тәҡдим ителде. Был уҡыусыларҙы дәртләндереп ине, тип иҫәпләй Р. Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы директоры Дилә Фәтҡуллина.

Бөгөн башҡорттар тураһында бар донъяға танытҡан "AY YOLA" төркөмө солисы Ринат Рамаҙанов балалар менән ғаиләлә башҡортса һөйләшеүҙең мөһимлеге тураһында һөйләне һәм ул анимацион фильмдар, йәнһүрәттәр төшөрә алыр үҙебеҙҙең башҡорт белгестәрен бәләкәйҙән - Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназияһында әҙерләй башларға тәҡдим итте.

Сәриә ҒАРИПОВА.

(Теманың дауамы 6-сы биттә).

12+

✓ *Ата-әсә шуға ла баланы рухи йәһәттән дә көслө булырға, бирешеп, ҡурҡып ҡалмаҫҡа, кәмһетергә маташыусыларға яуап бирә белергә өйрәтергә, ә баланың үҙен һәр саҡ маҡтап, үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙыра алырға тейеш.*

УЙЛЫҒА - УЙ

"Московский комсомолец" гәзитенең Санкт-Петербург өсөн сығарылышы яңыраҡ Выборг ҡалаһы мәктәптәренең береһендә булған хәл тураһында яҙып сыҡты. Бишенсе класс ҡыҙҙары туалетта күмәкләшеп үҙҙәренең класташ ҡыҙын туҡмағандар, төрлөсә мыҫҡыл иткәндәр һәм был хәлде видеоға төшөрөп тә алғандар.

ТӘРТИПһЕҘ БАЛАНЫ...

ауыҙлыҡлау сараһы тураһында баш ваталар

Бындай хәбәрҙәр хәҙер берәүҙе лә аптыратмай ҙа торғандыр: иртәнсәк тороп бит йыуған кеүек өйрәнде, күнекте бит кеше яманлыҡтарға. Тик бына мәғлүмәт сығанағында бер етди генә фекерле эксперттың балалар тарафынан ҡылынған яуызлыҡтарҙы фашистик язалауҙарға тиңләүе кемдәрҙелер уйландыра төштө, ә кемдәрҙер, бигерәк тә юғарыла ултырған закон сығарыусылар, йомшаҡ ҡәнәфиҙәрендә тағы бер ҡыбырҙашып, һиҫкәнеп алғандай булдылар. Заманына күрә яман ғәҙәттәре лә сығып ҡына тора бит! Буллинг тип аталған ошо күренеш бөгөн ҙур һәм фажиғәле хәлдәргә килтереүгә ҡарамаҫтан, уны беҙҙең тормоштан юҡ итеү түгел, шуға ҡаршы, исмаһам, берәй ҡәтғи сара ла күрелмәй һаман булһа. Бер яҡтан, был "буллинг " тигән, имеш, модалы һүҙҙең беҙгә Көнбайыштан килеүен әйтеү кәрәк. Урыҫ йә башҡа телдәрҙә уның аныҡ ҡына билдәләмәһе булмағас, ул сит телдәгесә аталып йөрөтөлә, шулай булғас, буллинг күренеше ҡасандыр беҙҙә лә осраған сүрәттә лә ул ҡәҙәрем үк хәүефле кимәлдә булмаған, тип уйларға нигеҙ бар.

Беҙҙең балалар араһында был афәттең ныҡлап тамыр йәйеп китеүенә 40-50 йыл бар шулай ҙа. Хатта унан алдараҡ та, совет осоронда ла әле, үтә ныҡ тәртипһеҙ балаларҙы ебәреп, тәрбиәләп алыусы ябыҡ типтағы уҡытыу-тәрбиә учреждениелары бар ине. Ә бына армия сафтарында тап шул йылдарҙа "дедовщина"ның сәскә атҡан осоро ине бит. Тик шулай ҙа уҡыусы балалар йәмғиәтенә уның да йоғонтоһо булғандыр тип әйтергә теләмәһәм дә, буллинг, йәғни ҡурҡытыу, мыҫҡыллау, ситнәтеү күренештәренең Рәсәй мәктәптәренә Көнбайыштан килеп инеүенә һис бер шик тә юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтөн "прогрессив-регрессив" һәм "модалы" күренеш-ҡылыҡтар тап шул тарафтарҙа ярала бит. Яҡшылыҡ, изгелек орлоҡтары бына шундай тиҙлектә таралһа икән дә, тик Европа менән Америкала әхлаҡ-әҙәп мәсьәләләрендә электән үк ҡыҙығырлыҡ өлгөләрҙең булмауына үҙебеҙ ҙә яҡшы шаһит.

Хәйер, беҙҙең һүҙ 10-11-әр йәшлек тәптә булған күңелһеҙ хәлде биҡ тиҙ генә энәһенән-ебенәсә асыҡлай һала. Олеся үҙен электән яфалауҙары хаҡында иң яҡын кешеһе - әсәһенә һөйләгән булһа ла, әсә кеше быға тейешле иғтибар бирмәй, фәҡәт ундай конфликттарҙан арыраҡ, ситтәрәк йөрөргә кәңәш итә.

Был тарихта барыһынан да нығыраҡ аптыратҡаны - мәктәп педагогтарының мөнәсәбәте; ни өсөн улар был хаҡта "белмәй ҡалыуҙы" йә булмаһа, ҡыҫылмауҙы өҫтөн күрә? Әлеге Выборг мәктәбе уҡытыусыһы үҙ класташын мыҫҡыллап, йәберләүселәргә "эшлекле" кәңәш бирә: күмәкләп туҡмау төшөрөлгән видеоны юҡ итергә ҡуша. Тап ошондай хәлдәрҙән фажиғә килеп сығыу ихтималлығын был уҡытыусылар әллә белмәйме? Илдә класташтарынан мыҫҡылланып үҙәгенә үткән күпме үҫмерҙең, ҡоралланып, мәктәпкә килеүен һәм үҙхөкөм акты килтергән ҡорбандар хаҡында ишетмәй ҙә, күрмәйме улар? Бынан ике йыл элек Брянск мәктәбенең 8-се класс уҡыусыһы Алина үҙен оҙаҡ ваҡыт мыҫҡыллап, туҡмап яфалаған класташтарына атаһының мылтығынан ут асырға мәжбүр була. Һөҙөмтәлә Алина үҙе һәм тағы бер ҡыҙ һәләк була, бишәү яралана. Ошоға тиклем булған ҡанлы атыш-үс алыу акты күпме булды? Иҫәбенә сығырлыҡ микән? Ә мәктәп педколлективтары бер ни булмағандай эшләй бирә, фажиғәләр була тора, онотола тора, язаһыҙлыҡ һәм буллинг ойоштороусылар һаны арта бара...

Асыҡланыуынса, "Касперский лабораторияһы" үткәргән һорау алыуҙар һөҙөмтәләре буйынса, һәр 10-сы бала интернетта ла хатта үҙенә ҡарата ойоштороған мыҫҡыллауҙарға дусар ителә икән. Эксперттар раҫлауынса, виртуаль селтәр аша даими булып торған кибербуллинг күренештәре арҡаһында балаларҙың 25 проценты үҙбаһа тойғоһон юғалта, 21 проценты көслө тетрәнеү кисерә, тағы ла 21 проценты үҙүҙенә бикләнә. Әйтеүемсә, мәктәп уҡыусылары араһындағы фажиғәләрҙең барыһы хаҡында ла теҙеп һөйләп сығыуҙан мәғәнә юҡ, улар хаҡында беҙ даими ишетеп-белеп торабыҙ, хатта видеояҙмаларын ҡарайбыҙ, тик йәмғәтселек өнһөҙ ҡалыуын дауам итә. Уҡытыусыларҙың ни өсөн бындай хәлдәрҙе "күрмәҫкә" тырышыуын "Московский комсомолец-Питер" гәзитенә рәсем уҡытыусыһы Евгения Заевская былай тип аңлата: уның хеҙмәттәштәре хәлдең эҙемтәләренән ҡурҡа: был турала юғарыға, бөтөн илгә мәғлүм булыуҙан, мәктәптең абруйы төшөүҙән һәм шуның эҙемтәһе булараҡ, премияһыҙ, финанслауҙан тороп ҡалыуҙан; шулай уҡ ата-әсәләр менән мәктәп етәкселеге араһында килеп тыуасаҡ конфликттан ҡурҡалар. Бынан тыш, ти ул, педагогтарҙың бөгөн ваҡыт яғы ла тар, өҫтәүенә, улар балалараралары мөнәсәбәттәрҙән ситтә тороуҙы һәм ҡыҫылмауҙы "норма" итеп күрә: йәнәһе, улар үҙҙәре белә. Психотерапевт Ришат Зараев иһә был йәһәттән ата-әсәләр иңенә лә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә. Баланың мәктәп хәлдәре, кәйефе, уҡыуҙағы уңыштары, класташтары менән мөнәсәбәттәре хаҡында мөмкин тиклем күберәк белергә саҡыра ул һәр ата-әсәне лә. Һәм был дөрөҫ тә, сөнки ата-әсә баланың иң яҡын, ышаныслы кешеләре. Кемдәрҙер баланың икенсе мәктәпкә күсереп кенә мәсьәләне хәл итеү яйын ҡарай икән, был уларҙың үҙҙәре өсөн тыныслыҡ эҙләүҙән килеп сығыуы тип тә аңлашыласаҡ. Ә бит бала менән бында ла шул уҡ хәл ҡабатланмаҫ, тип кем әйтә ала? Әлеге лә баяғы интернет селтәрҙәре аша ла бында хәбәр килеп етеүенә шик юҡ. Ата-әсә шуға ла баланы физик яҡтан ғына түгел, рухи йәһәттән дә көслө булырға, бирешеп, ҡурҡып ҡалмаҫҡа, кәмһетергә маташыусыларға яуап бирә белергә өйрәтергә, ә баланың үҙен һәр саҡ маҡтап, үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙыра алырға тейеш. Дөрөҫ, был эшкә бөтөн йәмғәтселек, шул иҫәптән, уҡытыусылар, мәктәп коллективтары менән берлектә тотоноу ғына ниндәйҙер һөҙөмтә бирер, бирһә, тик быға ла әллә ни ышаныс юҡ, сөнки һәр осраҡты контролдә тотоуы ла бит мөмкин түгелдер, ә баҫымсаҡ баланы ҡурҡытып, был хаҡта һөйләүҙән тыйып ҡуйыу буллинг ойоштороусы әхлаҡһыҙ һәм боҙоҡ үҫмергә бер ни тормай.

Йәмғәтселек, тигәндән, мәктәптәрҙәге бындай әшәкелек менән көрәш тураһында 2022 йылдан бирле закон проекты әзерләнә икән. Ошо ваҡыт эсендә нимәләр генә булып бөтмәне Рәсәй мәктәптәрендә! Тик депутаттарҙы, ҡабаланмауҙарына ҡарағанда, был мәсьәлә әллә ни борсомай, күрәһең. Мәктәптәрҙә тиҫтерҙәрен яфалаусыларға ҡаршы көрәш тураһында закон 2025 йыл ахырында ғына ҡаралырға тейеш икән. Был, тимәк, тағы ла балалар күҙ йәше, тағы ла юғалтыуҙар, тағы ла ҡайғы... Рәсәй Мәғариф министрлығы ошо йылдың март аҙағында белдереүенсә, колледждарҙағы ла ошо уҡ хәл хаҡында методик иҫкәрмә әҙерләнгән һәм улар уҡыусылар, педагогтар, ата-әсәләр өсөн тәғәйенләнә. Был документта әлеге мәктәп мөнәсәбәттәре тәртибен боҙоусыларға ҡарата административ һәм енәйәт яуаплылығы хаҡында ла иҫкәртеүҙәр бар.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ II Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезында ҡатнашыусылар төшкә тиклем тематик майҙансыҡтарҙа эшләне. Улар төрлө урындарҙа - 202-се полилингваль балалар баҡсаһында, 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназияһында, Өфө фән һәм технологиялар, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеттарында, Өфө вуз-ара кампусында, Ә.-3. Вәлиди исемендәге БР Милли китапханаһында, БР Милли музейында, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ойошторолдо. Майҙансыҡтарҙа башҡорт телен заман талаптарына ярашлы уҡытыу, балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә өйрәнеү һәм башҡа көнүҙәк темаларға һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙар үҙҙы.

✓ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының II Бөтә Рәсәй съезы сиктәрендә дәүләт теле сәйәсәте мәсьәләләре буйынса эшлекле һөйләшеү үтте. Туған телде һаҡлау һәм үҫтереүҙә ниндәй проблемалар бар? Уларҙы нисек хәл итергә? Туған телдәге мәғарифты артабан камиллаштырыу, Рәсәй халыҡтары телдәрен һәм республикаларҙағы дәүләт телдәрен өйрәнеү өсөн ниндәй шарттар тыуҙырыу талап ителә? Бөтә был мәсьәләләр түңәрәк өҫтәлдәр артында Башҡортостандың район-ҡалаларынан ғына түгел, ә Сыуашстан, Марий Эл һәм Удмуртия рсепубликалары вәкилдәре лә ҡатнашлығында тикшерелде.

✓ Төбәктәрҙә, бигерәк тә милли республикаларҙа туған телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләләрен бергәләп хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй съезда ҡатнашыусы ҡунаҡ - Татарстан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығының милли мәғариф идаралығы начальнигы Алһыу Шәрипова. "Әлеге ваҡытта беҙҙә уҡытыу биш телдә алып барыла, шул иҫәптән башҡорт теле өйрәнелә. Беҙҙә 30 халыҡтың телен, мәҙәниәтен, сәнғәтен өйрәнгән күп милләтле йәкшәмбе мәктәбе лә эшләй. Яр Саллы ҡалаһынан башҡорт теле уҡытыусыбыҙ бөгөн майҙансыҡтарҙың береһендә үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты", - тине ул.

✓ Сыуашстанда ла ошондай съезд үткәрергә уйлайҙар. Был хаҡта съезд ҡунағы - Сыуашстан Республикаһының Мәғариф институты проректоры Инесса Ядранская белдерҙе. "Башҡорт телен һаҡлау өсөн күтәрелгән күп мәсьәләләр беҙҙең өсөн дә мөһим. Ҡайһы бер башланғыстарҙы һәм ҡарарҙарҙы үҙебеҙҙә ҡулланырбыҙ, тип уйлайым. Ошондай съезд үткәреү - үҙе үк бик әһәмиәтле күренеш, уны ғәмәлгә индерәсәкбеҙ", - тип билдәләне ул.

✓ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының II Бөтә Рәсәй съезында билдәле йәмәғәт эшмәкәре Һәм мәғрифәтсе Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаеваға "Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исем бирелде. Белеүебеҙсә, Мәрйәм Сабирйән ҡыҙының методикалары, "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән программалары республиканың күп уҡыу йорттары өсөн терәк булды.

✓ *Элек беҙ Аллаһ һымаҡ табынып, изге күреп өйрәнгән уҡытыусыларға бөгөн әллә ни һан да юҡ... Әлбиттә, педагогтың үҙенә лә бәйлелер бында күп нәмә: белеме, зыялығы, кешелек сифаттары, ғәҙеллеге менән абруй яулай уҡытыусы.*

Ләкин бындай ҡағыҙ-нәсихәттәрҙең файҙаһы бар микән? Ҡәтғиерәк закон кәрәк һәм ошо закон буйынса яза сараларын аныҡ хоҡуҡ боҙоусыға ҡарата ҡулланыу ғына, бәлки, тәртипкә һалыр ине буллинг башлыҡтарын.

Юғиһә бит хәҙер улар хатта үҙҙәренең уҡытыусыларын да ҡурҡыта һәм мыҫҡыллай башланы түгелме? Элек беҙ Аллаһ һымаҡ табынып, изге күреп өйрәнгән уҡытыусыларға бөгөн әллә ни һан да юҡ икән дәбаһа... Әлбиттә, педагогтың үҙенә лә бәйлелер бында күп нәмә: белеме, зыялығы, кешелек сифаттары, ғәҙеллеге менән абруй яулай уҡытыусы. Ә инде балаларҙы яратмай һәм күп яҡлы төплө белем эйәһе лә түгеллеге асыҡланһа, өҫтәүенә, үҙен тейешенсә тота белмәй икән, ундай кешегә мәктәптә, әлбиттә, урын юҡ. Был йәһәттән балалар күңеле айырыуса һиҙгер, кемдең кем икәнлеген бик тиҙ асыҡлай ала улар.

Бигәйбә, һүҙ депутаттар хаҡында ла ине бит әле. Ошо көндәрҙә мәғлүм булыуынса, Дәүләт Думаһының Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет башлығы Артем Метелев тиҫтерҙәрен йә үҙенән бәләкәйҙәрҙе яфалаусы тәртипһеҙҙәрҙе махсус учреждениеға бирергә, йә булмаһа, ундайҙарҙы өйҙә уҡытыу хаҡында закон проекты әҙерләгән. Әгәр ҙә бала даими рәүештә мәктәпте ҡурҡыуҙа тота һәм бер кемде лә тыңламай икән, уға мәктәп коллективында урын юҡ, сөнки бер бала арҡаһында ҡалған уҡыусыларҙың тыныс шарттарҙа белем алыуға хоҡуғы боҙолорға йә сикләнергә тейеш түгел, ти депутат. Ләкин, үкенескә, был проектҡа ҡаршылар ҙа бар. Улар фекеренсә, хулиган баланы мәктәптән айырып тәрбиәләү проблеманы хәл итмәйәсәк. Мәктәп етәкселегенә проблеманы йәшереп ҡалдырырға түгел, ә уны хәл итергә тырышырға кәрәк. Хәлдең эҙемтәһе менән көрәшергә түгел, ә шул хәлде булдырмау, иҫкәртеү өсөн көрәшеү кәрәк. Мәсьәләне бер класс етәкселе иңенә һалып ҡуйыу ҙа дөрөҫ түгел, мәктәптәрҙә конфликт комиссиялары булдырырға кәрәк, ти экспертар. Кемдер тәртипһеҙгә яза биреүҙе ҡарағанда, уны тәрбиәләү яҡшыраҡ, ти. Ҡыҫҡаһы, күпме депутат, шунса фекер. Буллинг түгел, хатта берәҙәк эттәр хаҡында ла һаман бер фекергә килә алмай йонсой бит улар. Беҙҙә бит яраталар аныҡ эш башҡарыуға ҡарағанда, бәхәсләшергә, оҙаҡ-оҙаҡ фекер алышырға, гәп һатырға, ә ваҡыт көтмәй. Тәртипһеҙ буллинг башлыҡтары һис бер язаһыҙ үҙ ҡылыҡтарын дауам итә һәм шул арала мәктәпте тамамлап, шул уҡ тәртипһеҙ көйө уҡыу учреждениеһынан сығып та китә. Тормош мәктәбендә "буллинг" ойошторорға... Йә тормош ундайҙарға үҙе "буллинг" күрһәтәсәк. Тик был инде депутаттарҙы ла, бигерәк тә педколлективтарҙы ла борсомай, улар тәртипһеҙ уҡыусынан ҡотолғанға ҡыуана ғына, моғайын.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

ЯУҘЫ ЯҢҒЫҘ ҠАЙТАРМАЙҘАР

Бына көтөп алынған май байрамдары шаулап-гөрләп үтеп тә китте. Ә бит Бөйөк Еңеүҙең оло юбилейын беҙ, рәсәйҙәр генә тулҡынланып көтмәнек, бөтөн донъя иғтибары ҡеүәтле фокус булып, илебеҙ баш ҡалаһы Мәскәүгә йүнәлтелде был көндәрҙә. Шуның өсөн дә Рәсәй халҡының тантанаһын уртаҡлашырға тип, һәр төрлө ҡаршылыҡтар һәм янауҙарға ҡарамаҫтан, Бөйөк Еңеү байрамында алты илдең юғары кимәл етәксеһе, 27 дәүләт башлығы, тиҫтәнән ашыу халыҡ-ара ойошма вәкилдәре килде. "9 май - беҙҙең күп милләтле халҡыбыҙ өсөн изге көн. Нацизмды ҡыйратыуҙа Советтар Союзы хәл иткес көс булды, - тине ил башлығы 8 майҙа сит ил ҡунаҡтары өсөн Президент Владимир Путин исеменән ойошторолоған тантаналы төшкө аш мәлендә сығыш яһап. - Был тарихи хәҡиҡәтте бер кем дә өндәшмәй ҡала, алдаша йә беҙҙән тартып ала алмай".

Әйткәндәй, Украина властары байрам көндәрендә Рәсәйҙең утты туҡтатып тороу хаҡындағы тәҡдимен кире ҡағып ҡына ҡалманы, Мәскәүҙе, Еңеү көнөн ҡаршыларға йыйыныусы сит ил лидерҙарын ҡурҡытырға маташты, тантанаға бармаҫҡа өндәне. 6 һәм 7 майҙа Киев режимы 524 пилотһыҙ шартлатҡыс аппарат, 45 экипажһыҙ катер һәм көнбайыш ракеталарын файҙаланып, Рәсәй территорияларын утҡа тотто, Курск һәм Белгород өлкәләре сигенән үтеп инергә маташып, 36 тапҡыр һөжүмгә ташланды. Һөҙөмтәлә дошман үҙ башына ҡоторҙо: бик күп юғалтыуҙарға дусар ителде. Әммә илебеҙ сигендә барған бындай хәлдәрҙән бер кем дә ҡурҡып торманы, 9 май байрам тантаналары ваҡытында башланып китте, Ҡыҙыл майҙан тулы халыҡ, ә сал сәсле һуғыш ветерандары, беҙгә теләктәш һәм дуҫ сит ил ҡунаҡтары байрамдың иң түренән урын алды. Бынан тыш, легендар Ҡыҙыл майҙанда буласаҡ парадта беҙҙең хәрбиҙәр менән иңгә-иң сафтарға теҙелеп үтеү маҡсатында һәм Рәсәй иленә, уның Еңеү яулаған ҡаһарман халҡына ихтирам белдереп, 13 дәүләттең парад расчеты ла килде һәм байрамыбыҙҙың онотолмаҫ бер биҙәге булды, донъя йөҙөндә Еңеү тантанаһының абруйын күтәрҙе.

Был йәһәттән байрам һөҙөмтәләре буйынса журналистар алдында белдереү яһап, РФ Президенты Владимир Путин Рәсәйгә ҡарата дошманлыҡ һәм хөсөт ояһы булған Евросоюз етәкселәре тыйыуына, хатта һауа юлдарын ябыуға тиклем барып етеүҙәренә ҡарамаҫтан, Сербия, Словакия, Босния һәм Герцеговина дәүләттәре лидерҙарының барыбер ҙә шатлыҡ уртаҡлашырға юл табып килеп етеүҙәрен айырым билдәләп китте. Шул уҡ ваҡытта ул Курскиҙы нацистарҙан азат итеүҙә ҙур ярҙам күрһәткән Корея Халыҡ Демократик Республикаһына, уның ҡурҡыу белмәҫ Халыҡ армияһы яугирҙарына рәхмәтен белдерҙе һәм күҙмә-күҙ осрашыу форсатынан файҙаланып, парад мәлендә уларҙың һәр береһенең ҡулдарын ҡыҫыуына шат булыуын әйтте. Корея Республикаһы башлығы Ким Чен Ындың "Әгәр АҠШ йә уның союздаштары беҙҙең туғандаш дәүләт - Рәсәйгә һөжүм итә ҡалһа, ҡораллы көстәр менән ярҙамға һис икеләнеүһеҙ бойроҡ бирергә" әҙер булыуын белдереүе ысын дуҫлыҡтың яуҙа һыналыуын Курск операцияһында ла иҫбатланы инде. Үкенескә, Ким Чен Ын үҙе байрамға килә алманы, сөнки ул, әйтеүҙәренсә, самолетта осмай, ә поезда сәфәр күп ваҡытты аласаҡ, ә президент үҙ илен оҙаҡҡа ташлап йөрөмәүҙе хәйерле күрә.

Президент Владимир Путин, байрамға килгән Ҡытай Халыҡ Республикаһы рәйесе Си Цзиньпиндың төп ҡунаҡ булыуын билдәләп, Рәсәй менән Ҡытай араһында емешле һөйләшеүҙәр алып барыуҙары һәм бер нисә килешеүгә ҡул ҡуйыуҙарын әйтте.

Тантанаға килгән башҡа илдәр менән дә энергетика, сауҙа, финанс, фән, мәҙәниәт һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек итеү килешеүҙәре төҙөлөүен белдерҙе Президент журналистар менән осрашыуҙа. Рәсәй һәм сит ил киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре алдында Владимир Путин 15 майҙа Стамбулда Киевҡа тураған-тура һөйләшеүҙәрҙе ҡайтанан тергеҙергә тәҡдим итте. 2022 йылда башланған был һөйләшеүҙәр, хәтерегеҙҙә булһа, Киев ғәйебе менән өҙөлгәйне. Шуның менән бергә ил башлығы, әгәр Украина яғы килешеүҙе боҙмайынса шартты һаҡлаған хәлдә, утты ысынлап та туҡтатыуға өлгәшеү мөмкин буласағын билдәләне. Был хаҡта ул шундуҡ Төркиә башлығы менән һөйләште, һәм Эрдоган осрашыуҙар өсөн шарттар булдырыу бурысын вәғәҙәләне лә инде.

Был яңылыҡты эләктерә һалып алған Аҡ йорт хужаһы Дональд Трамп Рәсәй лидерының Украина менән тура һөйләшеүҙәре тәҡдимен ыңғай баһалап, уның Мәскәү өсөн дә, Киев өсөн дә "бөйөк көн" буласағы хаҡында социаль битендә яҙып сыҡты. Рәсәй лидеры белдереүенең әһәмиәте, The Sun баҫмаһы баһалауынса, "Путин Украина менән тыныс һөйләшеүҙәргә ишек аса" тигән һүҙҙәрҙә лә бик асыҡ сағыла. Известия.ру сайтында билдәләнеүенсә, Украина лидеры Зеленский үҙенең Телеграм-каналында РФ Президенты башланғысын ыңғай билдә тип яҙҙы һәм, әгәр ҙә Мәскәү Киев менән Евросоюз илдәренең 12 майҙан 30 көнгә утты туҡтатыу шартын үтәһә, Украинаның был осрашыуға әҙер булыуы хаҡында белдереп, ультиматум ҡуйҙы.

Шул уҡ ваҡытта АҠШ властары Украинаға Германиялағы Америка складтарынан реактив системалар өсөн 125 дана алыҫ араға осоусы ракета, 100 дана зенит комплексы ракеталары ебәреүҙе хупланы. Ике йөҙлө Дональд менән Зеленскийҙың әртис икәндәрен дә онотмайыҡ, уларҙың теле берҙе һөйләй, ә ҡулдары икенсене эшләй: 11 майҙа Украина армияһы Курск өлкәһе Рыльск ҡалаһының граждандар объекттарын әлеге лә баяғы HIMARS реактив системаһынан ракета утына тотто. Ә бит тыныслыҡ хаҡында ниндәй ҙә булһа һөйләшеүҙәр ваҡытында Киевты көнбайыш ҡоралы менән тәьмин итеү ҡәтғи туҡтатылырға тейеш ине. РФ президенты хәбәр итеүенсә, Рәсәй ғәскәрҙәре миллион ярымдан ашыу пилотһыҙ осоу аппараттары менән тәьмин ителде. Ә Killnet хакерҙар төркөмө Украина хәрби көстәренә алғы һыҙыҡта Рәсәй дрондарын күҙәтеү һәм эҙәрлекләү мөмкинлегенә юлды япты: хакерҙар төркөмө киберһөжүм һөҙөмтәһендә Рәсәй яугирҙарына Сумынан Одесса өлкәһенә тиклем урынлашҡан Airfaince һауа күҙәтеү системалары станцияларының координаттарын бирҙе. Һөҙөмтәлә дошмандың 7 радиолокация станцияһы тулыһынса юҡ ителде, һәм улар 1,6 млн евро самаһы зыян күрҙе...

Халыҡ-ара мөхиттә, зиһене асылып киткән сағында Трамптың әйтеүенсә, ҡан ҡойоуҙарға урын ҡалдырмай, тыныс хеҙмәттәшлек, бизнес менән генә шөғөлләнеү, ысынлап та, өр-яңы донъяны асыр ине Ер йөҙө халыҡтарына. Күрше илдәр араһында килеп тыуа торған конфликттар тыныс аңлашыу юлы менән хәл ителһә ине лә бит. Ошо юҫыҡта Һиндостан менән Пакистан араһында башланып киткән һуғыштың ни бары дүрт көндә тамамланыуы, уйлап ҡараһаң, күпме кеше ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалды, тыныс хеҙмәттәшлеккә күпме юлдар асты, күпме кешегә һуғыштың бөгөнгө цивилизация өсөн фәкәт емергес һәм ҡайғы-хәсрәт кенә булыуын аңларға ярҙам итте...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Баш ҡалабыҙҙың "Торатау" конгресс-холында үткән "Арктур" Бөтә Рәсәй һөнәри конкурсы өҫтәмә һөнәри белем биреү системаһында эшләүселәрҙең һәләттәрен күрһәтергә, бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек бирҙе. Был бәйгегә Рәсәйҙең төрлө төбәгенән 250 кеше көсөн һынарға килде. Быйылғы конкурс алты номинация буйынса уҙғарылды, уларҙа методистар һәм өҫтәмә белем биреүҙең башҡа белгестәре лә үҙҙәрен күрһәтә алды. Төрлө яҡтан килеүсе ҡатнашыусылар сараның ойоштороу кимәленә генә түгел, халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығына ла хайран ҡалды.

✓2025 йылдың июнендә Рәсәй халҡын сираттағы оҙайлы ялдар көтә. Хеҙмәт министрлығы Рәсәй көнө уңайынан 12 июндән 15-нә тиклем ял көндәре булыуы хаҡында иҫкә төшөрә. Быйыл 12 июнь кесаҙнаға тура килә. Бынан тыш, 8 марттағы ял көнө 13 июнгә күсерелде, 14 һәм 15 июнь - ғәҙәти ял көндәре. 11 июндә эш ваҡыты бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓Һуңғы ҡыңғырау көнөндә Башҡортостан магазиндарында иҫерткес эсемлектәр һатылмай. 2025 йылда байрам 24 майға тура килә. Был турала республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау министрлығында иҫкә төшөрҙөләр. Сикләү кафе һәм ресторандарға ҡағылмай.

✓"Башҡортостандың мәктәпкәсә белем биреү программаларын ғәмәлгә ашырыусы мәғариф ойошмаларында эшләгән йәш уҡытыусыларға "Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары тураһында" указға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, йыл да тапшырылған гранттар һаны 50-нән 75-кә тиклем арттырылды. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларының педагогик хеҙмәткәрҙәре өсөн гранттар 2023 йылда Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса булдырылды. Бер гранттың суммаһы - 575 мең һум.

✓Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәр өсөн "Салют" республика реабилитация-белем биреү үҙәгендә Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән дә балалар сәләмәтлеген нығытырға мөмкин. Әлеге үҙәк республика етәкселе Радий Хәбировтың башланғысы менән Өфөнөң Киров районындағы "Салют" шифаханаһы нигеҙендә төҙөлдө. Бында көнөнә 250 кешене ҡабул итеү өсөн реабилитация үҙәге, медицина блогы менән 120 урынлыҡ стационар, балалар психоневрология һәм эпилептология үҙәге, шулай уҡ 192 урынға иҫәпләнгән "Йондоҙ" мәктәбе урынлашҡан.

✓Танылған йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлсөм Бикбулатова "Ете ҡыҙ" проектында ҡатнашыусылар менән бергә Махсус хәрби операция билә-мәһендә хеҙмәт иткән яугирҙар янында булып ҡайтҡан. Тәүәккәл ҡатын-ҡыҙҙар ирегеттәргә гуманитар ярҙам алып барған. Гөлсөм Бикбулатова яҡташ яугирҙәргә моңло йырҙарын бүләк иткән.

✓ *"Урал батыр" эпосы тураһында әйтергә теләйем. Башҡорт халҡының аҫыл ҡомартҡыһын артабан да һаҡлап ҡалыу, үҫтереү өсөн йыл һайын июнь айында "Урал батыр" эпосы көнөн үткәрергә тигән тәҡдим бар.*

ҠЫҪҠАСА

ГЕРОЙ ИСЕМЛЕЛӘР

Башҡортостандың дүрт мәктәбенә Советтар Союзы Геройҙары һәм республиканың билдәле эшмәкәрҙәренең исемдәре бирелде. Документҡа ярашлы, Балаҡатай районының Яңыбай ауылы мәктәбе хәҙер Фазлетдин Ислахов исемен йөрөтә. Балтас районының Сәйтәк ауылы мәктәбенә Дан орденының тулы кавалеры Рифҡәт Тукаев исеме бирелде. Балтас районының Түбәнге Һикеяҙ ауылы урта мәктәбе артабан Советтар Союзы Геройы Ғабдулхай Сәйетов исемендәге мәктәп тип атала. Әлшәй районы Раевка ауылының 4-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе лә Советтар Союзы Геройы Павел Щербаков исемен алды. Исемде үҙгәртеүгә бәйле сараларҙы финанслау муниципаль район бюджеттарына йөкмәтелде.

✓ **Өфө вуз-ара кампусында тарихи объекттарҙың һанлы игеҙәктәрен эшләйҙәр.** "Ҡасандыр ҡала үҫешенә ҙур өлөш индергән яҡташтарыбыҙ йәшәгән йорттар һанлы формала ғына һаҡланып ҡалмай, ә 3D-принтерҙа баҫтырып сығарырға мөмкин булған моделдәргә лә әйләнә. Проект ҡаланың архитектура тарихын, ҡасандыр Өфөлә йәшәгән күренекле кешеләр тураһында хәтерҙе һаҡлауға йүнәлтелгән", - тип һөйләне Өфө дәүләт нефть техник университетының архитектура кафедраһы мөдире Светлана Байморатова. Был уҡыу йортоноң архитектура кафедраһы күп йылдар Өфө ҡалаһының архитектура һәм ҡала төҙөлөшө тарихы менән бәйле тикшеренеү эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә. Студенттар үҙҙәренең уҡытыусылары етәкселегендә креатив индустриялар һәм урбанистика лабораторияһында юғалған архитектура ҡомартҡыларының ҡиәфәтен тергеҙә, төрлө тарихи объекттарҙың 3D-моделдәрен һанлаштыра һәм төҙөй. Лабораторияла булған ҡомартҡыларҙы үлсәп, һыҙмалар эшләйҙәр. Күп кенә һәйкәлдәр юҡ, уларҙы һүрәтләүҙәр һәм һаҡланып ҡалған фотоһүрәттәр буйынса тергеҙергә тура килә уларға. Проект тарихи эҙләнеүҙәр, виртуаль моделдәр, макеттар төҙөү, сайт өҫтөндә эшләү кеүек төрлө форматтарҙа тормошҡа ашырыла.

✓ **2025 йылда Башҡортостанда 2338 белгестең медицина колледждарын тамамлап сығыуы көтөлә, тип хәбәр иттеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан.** Белдереүҙәренсә, был Нефтекамала, Учалыла, Октябрьскийҙа һәм Мәсәғүттә медицина колледждарының яңы филиалдары асылыуға бәйле. Хәҙер уларҙа 757 студент уҡый, ә быйыл 142 кеше "Шәфҡәт туташы эше" һөнәре буйынса уҡыуҙы тамамлай. Шул уҡ ваҡытта быйыл көҙ Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында Сибай медицина колледжының филиалын асыу планлаштырыла. Бында туғыҙынсы класты тамамлаусылар өсөн "Шәфҡәт туташы эше" һөнәре буйынса 25 кешегә иҫәпләнгән бер бюджет төркөмө ойоштороla. "Бөтә студенттар ҙа эшкә урынлашыу ниәте тураһында килешеү төҙөй. Был уларға буласаҡ эш урынында практика үтергә мөмкинлек бирә. Шулай итеп, студенттар уҡыған саҡта уҡ үҙҙәренең һөнәре менән таныша һәм коллективтарға өйрәнә", - тип билдәләнеләр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ЯҢЫ БЕЛЕМ УСАҠТАРЫ

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының II Бөтә Рәсәй съезының пленар ултырышында ҡатнашты.

Пленар ултырыш алдынан төбәк етәксеһе Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала һәм Өфө районында төҙөлгән заманса мәктәптәрҙең проекттары менән танышты. Мәҫәлән, 2025 йылдың 1 сентябрендә Өфөнөң Кузнецов затоны биҫтәһендә 2200 урынлыҡ мәктәп асыласаҡ. Ул Волга буйы федераль округындағы иң ҙур белем усағы буласаҡ. Өфө хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин, уҡыу кластарынан тыш, учреждениела дүрт спорт һәм тамаша залдары, кино һәм театр студияһы, нәшриәт үҙәге, робот техникаһы класы, шулай уҡ 3D алымындағы интерактив компьютер бүлмәһе буласаҡ, тип һөйләне. Мәктәп биләмәһендә ике баскетбол майҙансығы, мини-футбол, теннис майҙансыҡтары, йүгереү юлдары, тренажер комплекстары урын аласаҡ.

Баш ҡаланың Глумилин биҫтәһендә яңы уҡыу йылына 1 225 урынлыҡ мәктәпте сафҡа индереү планлаштырыла. Нефтекамала 1 225 урынлыҡ 18-се "Кәрәҙҙәр" мәктәбе төҙөлөп бөтәсәк. Уның башланғыс кластарында тәбиғи-ғилми һәм технология йүнәлешендәге предметтарҙы тәрән өйрәнеү индерелә. Артабан мәктәп Өфө вуз-ара кампусының Геном үҙәге, Өфө фән һәм технологиялар университеты, Бөрө фармакология колледжының Нефтекама филиалы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итергә ниәтләй. Стәрлетамаҡтың Яр буйы биҫтәһендә 2026 йылда 1 050 урынлыҡ 1-се "Гамма" белем биреү үҙәген төҙөп бөтөү планлаштырыла. Бында III кластан программалау һәм робот техникаһы нигеҙҙәрен, ә V кластан физика һәм химия фәндәрен өйрәнергә тәҡдим ителә. Бынан тыш, Өфө районының Шмидт ауылында 160 урынлыҡ балалар баҡсаһы менән 640 уҡыусыға иҫәпләнгән Белем биреү үҙәге төҙөлә.

Шулай уҡ Башҡортостан Башлығы педагогтар өсөн милли мәҙәниәт элементтары булған форма өлгөләрен һәм Шайморатов кластары уҡыусылары өсөн яңы форма моделдәрен ҡараны. "ОПТРИ" предприятиеһы директоры Зөлфирә Ғәзизова әйтеүенсә, мәктәп формаһын тегеүҙә илебеҙҙә етештерелгән сифатлы тукымалар ғына ҡулланыла.

БАШҠАРАҺЫ ЭШТӘР БАР ӘЛЕ

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының икенсе Бөтә Рәсәй съезында әле байтаҡ йүнәлештәр буйынса эштәр башҡарырға кәрәклеге һәм башҡорт телен өйрәнеү системаһындағы төп шарттар тураһында һөйләне.

Билдәләнеүенсә, Башҡортостан өсөн ғаиләне һәм мәктәпкәсә белем биреү звеноһынан башлап мәғариф системаһының барлыҡ кимәлдәрен үҙ эсенә алған этноменәҙәни тәрбиә системаһын яйға һалыу мөһим. Бөгөн 800-ҙән ашыу балалар баҡсаһында ошондай эш алып барыла. "Беренсеһе. Беҙ һеҙҙең менән балалар баҡсаларында башҡорт телен өйрәнеү кескәйҙәр өсөн сағыу һәм мауыҡтырғыс булырға тейешлеге хаҡында һөйләшкәйнек. Мәғариф һәм фән министрлығынан, Мәғарифты үҫтереү институтынан, юғары уҡыу йорттарының профилле кафедраларынан ошо мәсьәләне хәл итеүгә әүҙемерәк ҡушылыуығыҙҙы һорайым. Был эшкә йәш педагогтарҙы йәлеп итергә кәрәк. Яңы методикалар, үҫтереүсе уйындар, ҡыҙыҡлы йөкмәткене менән, һис шикһеҙ, балалар баҡсаларында һәм ғаиләләрҙә башҡорт телен өйрәнеү теләге көсәйер. Быйыл Өфө ҡалаһының Мәғариф идаралығы ярҙамында бер нисә балалар баҡсаһында "Аҡбуҙат" инновацион проекты ғәмәлгә ашырыла, ул мәктәпкәсә йәштәге балаларға башҡорт телендә йыш ҡулланылған 100 һүҙҙе үҙләштерергә ярҙам итә. Был проектты республиканың барлыҡ мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына таратырға тәҡдим итәм.

Беҙҙең бурыс - традицион ҡиммәттәр нигеҙендә уҡыусыла гармониялы шәхес һәм патриот тәрбиәләү. Уҙған йылда 1-9-сы класс уҡыусылары өсөн "Тәрбиә нәбаҡтары" белем биреү программаһы нәшер ителде. Был программаны бөтә милли һәм полилингваль мәктәптәргә индерергә тәҡдим итәм. Үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү эше халҡыбыҙҙың бай мәҙәни мираҫына нигеҙләнергә тейеш. Айырыуса донъя әҙәбиәтенең үҙенсәлекле боронғо әҫәре - үҙебеҙҙең "Урал батыр" эпосы тураһында әйтергә теләйем. Башҡорт халҡының аҫыл ҡомартҡыһын артабан да һаҡлап ҡалыу, үҫтереү өсөн йыл һайын июнь айында "Урал батыр" эпосы көнөн үткәрергә тигән тәҡдим бар.

Әйткәндәй, яңыраҡ донъя чарттарында яңғыраған "Һомай" йыры эпостың республика бренды булараҡ та әһәмиәтен күрһәтте. AY YOLA - телде һәм мәҙәниәтте, рухи ҡиммәттәрҙе һөйөү өлгөһө. Ринат Рамаҙановҡа, Адель һәм Руслан Шәйхетдиновтарға мәҙәниәтебеҙҙе пропагандалауҙары өсөн рәхмәт", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы һүҙҙәренсә, йәш һәм тәжрибәле белгестәрҙең, студенттарҙың һәм уҡытыусыларҙың, балаларҙың һәм ата-әсәләрҙең ижади көстәрен туплауҙа мөһим аҙымдар яһалды. "Энтузиастар бик күп. Ошондай берҙәмлек менән туған телдәрҙе һаҡлау өсөн күп эштәр атҡарырбыҙ тип ышанам.

Хөрмәтле башҡорт теле уҡытыусылары! Туған телебеҙҙе үҫтереү буйынса хеҙмәтегеҙ өсөн тағы ла бер тапҡыр рәхмәт белдерәм", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.

БЕРҘӘМ МӘҒЛҮМӘТ КӘРӘК!

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар тураһында берҙәм мәғлүмәттәр базаһын булдырырға тәҡдим итте.

Дәүләт Думаһына "Совет халҡының 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүен мәңгеләштереү тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереүҙе күҙ уңында тотҡан закон проекты тәҡдим итә. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Берҙәм интернет-ресурс Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың: фронттан ҡайтҡандарҙың, һәләк булғандарҙың, хәбәрһеҙ юғалғандарҙың хәтерен мәңгеләштереүгә хеҙмәт итергә тейеш. Шулай итеп, тикшерелгән мәғлүмәттәр һәм архив документтарының күсермәләренә һылтанмалар менән рәсми мәғлүмәт сығанағы булдырыла. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, хәҙер бер нисә сайтта ошондай мәғлүмәттәр бар. Шуға бәйле хаталар булыуы һәм мәғлүмәттең дөрөҫлөккә тап килмәүе ихтимал. Берҙәм ресурс ветерандарҙың ейән-ейәнсәрҙәренә лә, тикшеренеүселәргә лә, тарихсыларға ла файҙалы булырға тейеш. Ул Еңеү тураһында хәтерҙе киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Аҫҡын районының Табаҫҡытамаҡ ауылында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәйкәл асылды. Мемориал урындағы мәктәптең тарих уҡытыусыһы Глафира Фәершина инициативаһы менән ҡуйылды. Аҫҡын районы хакимиәте башлығы Денис Йосопов һүҙҙәренсә, педагог бер нисә йыл ауылдаштары менән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары тураһында мәғлүмәт йыйған.

✓2025 йылдың мартында Башҡортостан халҡы дөйөм суммаһы 6,38 миллиард һумлыҡ 1702 ипотека кредиты алған. Уртаса чек 3,75 миллион һум тәшкил иткән, ә уртаса ваҡыты - 272 ай (яҡынса 22,6 йыл). Мартта, февраль менән сағыштырғанда, ипотека күләме 15 процент, кредиттар һаны - 15 процент, ә уртаса чек 7 процентҡа артҡан. Был турала Берләштерелгән кредит бюроһы мәғлүмәттәренән билдәле булды.

✓9 майҙа Стәрлетамаҡтың Еңеү паркында, Махсус хәрби операция яугирҙарына мемориал асыласаҡ урында, киләсәк быуындарға хат менән "Ваҡыт капсулаһы" һалыу тантанаһы үтте, тип хәбәр итәләр ҡала хакимиәтенән. "Ваҡыт капсулаһы"н асыу Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 100 йыллығын билдәләгән байрам тантанаһында, 2045 йылда, була.

✓Башҡортостанда 21 апрелдән 2026 йылға төҙөкләндереү объекттарын һайлап алыу буйынса тауыш биреү башланды. Ул 12 июнгә тиклем бара. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова билдәләүенсә, тауыш биреүҙә ҡатнашҡан йәмәғәт биләмәләре исемлеге парктар, скверҙар торошона ҡарап һәм халыҡтың фекеренә таянып төҙөлә. Исемлектә 241 биләмә бар. 2026 йылда шуларҙың 159-ына реконструкцияулау өсөн аҡса бүленә. "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә федераль бюджеттан эштәргә 1 млрд 164 млн һум йүнәлтелә.

✓Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында йәшәүсе Дамира һәм Фәйзрахман Усмановтар - Сыңғыҙҙа тау битен кәртәләп, меңдән ашыу ағас ултыртҡан замандаштарыбыҙ. Улар йыл һайын Һаҡмар йылғаһы буйын таҙалауҙары менән дә мәктаулы. Был юлы улар Сибайҙа урынлашҡан "Урал аръяғы" шифаханаһы биләмәһенә 80 төп ҡарағай ултыртты. "Бер аҙ булһа ла тәбиғәтте һаҡлауға, тирә-яҡты йәшелләндереүгә үҙ өлөшөмдө индерергә теләйем. Барса кеше ағас ултыртһа, тирә-яҡты таҙалауға, сүпләмәүгә ыңғай ҡараһа, донъябыҙ күпкә күркәм булыр ине", - ти 76-сы йәш менән барыусы Фәйзрахман Усманов.

✓Стәрлетамаҡ йөҙөүсеһе Виталий Цыбрюк Парижда һуҡыр спортсылар араһында йөҙөү буйынса халыҡ-ара паралимпия комитетының донъя сериялы этабында "алтын" яуланы. Ул ирекле стилдә 50 метр арауыҡҡа йөҙөүҙә яҡшы һөҙөмтә күрһәтте. Турнир Франция баш ҡалаһында 24 майҙа үтте. Ярыштарҙа донъяның 47 иленән 217 көслө спортсы ҡатнашты. Виталий Цыбрюк 2-се балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбендә физкультура буйынса инструктор булып эшләй.

✓ *Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында республиканан 700 меңдән ашыу кеше фронтҡа китә. 200 меңдән ашыу яҡташыбыҙ орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә, 278-е Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.*

БАЙРАМ ХАЙРАН ИТТЕ!

ЕҢЕҮ ПАРАДЫ

9 майҙа Өфөнөң Октябрь проспекты буйлап Өфө гарнизоны хәрбиҙәре, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, Өфөләге көс структуралары ойошмалары хеҙмәткәрҙәре, хәрби хәрәкәттәр һәм хәрби хеҙмәт ветерандары, курсанттар, кадеттар һәм хәрби техника парады үтте.

Тантаналы байрам маршында 31 парад берәмеге ҡатнашты. Сара "Первушино" бәләкәй авиация төркөмөнөң сығышы менән тамамланды. Ҡунаҡ трибуналарынан сараны Бөйөк Ватан һуғышы һәм Махсус хәрби операция ветерандары, тыл хеҙмәтсәндәре, һуғыш балалары, хәрби хеҙмәт һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандары ҡараны. Парадта ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сәләмләне һәм Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы менән ҡотланы. "Беҙ ветерандар алдында баш эйәбеҙ. Һеҙҙең фронттағы яугирлыҡ, тылдағы фиҙаҡәр хеҙмәт - бөгөнгө һәм киләсәк быуындар өсөн лайыҡлы өлгө. Ватаныбыҙ өсөн ғүмерен аямаған геройҙарҙың барыһын да хәтерләйбеҙ. Уларҙың үлемһеҙ ҡаһарманлығы алдында баш эйәбеҙ. Уларға мәңгелек дан!" - тине ул.

"ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК" МАРШЫ

9 майҙа Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы "Үлемһеҙ полк" маршы ойошторолдо.

Өфөнөң Октябрь проспекты буйлап 6 саҡрым араны 200 меңдән ашыу кеше үтте. Әйткәндәй, был үҙенсәлекле рекорд булды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров колоннала үҙенең олатаһы - фронтовик Барый Латип улы Хәбировтың портретын тотоп ҡатнашты. Барый Хәбиров һуғышҡа 1941 йылдың авгусында алына. 206-сы айырым линия бәйләнеш батальонының телефон-строевой ротаһында хеҙмәт итә, яралана, миҙалдар, шул иҫәптән "Ленинградты обороналаған өсөн" миҙалы менән наградлана. Акция Өфөлә 12-се тапҡыр ойошторолдо. Башҡортостан буйынса "Үлемһеҙ полк" акцияһында, ғөмүмән, 510 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан.

ЕҢЕҮ АГИТПОЕЗЫ

13 майҙа Өфөгә Еңеүҙең 80 йыллығы һәм Ватанды һаҡлаусы Йылы уңайынан РФ Оборона министрлығы тарафынан ойошторолған тематик поезд килде.

"Хәтерҙә берҙәмлек. Батырлыҡта көс!" тип аталған махсус состав 19 вагондан тора. Уға акцияла ҡатнашыусылар өсөн дүрт пассажир вагоны, интерактив экспозициялар менән һигеҙ тематик вагон, тарихи хәрби техника өлгөләре менән дүрт платформа һәм саралар үткәреү өсөн күсмә платформа-сәхнә, шулай уҡ багаж вагоны беркетелгән. Тематик вагондарҙа теләгән һәр кем һуғыш йылдарындағы йәшерен архив документтары, шулай уҡ төрлө ғәскәр төрҙәре экспозициялары менән таныша алды. Өфөнөң тимер юл вокзалында состав урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 9-ҙан 14-кә тиклем торҙо һәм артабан Силәбегә юл алды. Еңеүгә арналған тематик поезд маршруты барлығы 75 ҡаланы үҙ эсенә алған. Тур 3 июлдә генә тамамлана.

ЕҢЕҮ ЭСТАФЕТАҺЫ

Баш ҡалабыҙ Өфөлә Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған еңел атлетика буйынса Еңеү эстафетаһы быйыл 76-сы тапҡыр уҙҙы. Ярыш Өфө ҡалаһы хакимиәте, "Молодежная газета" призҙарына үткәрелде.

Эстафетаның тарихы 1947 йылдан яҙыла. Ул саҡта бер төркөм Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Еңеү байрамын спорт бәйгеһе менән билдәләргә ҡарар итә. "Ленинсы" гәзите редакцияһы был тәкдимде күтәреп ала һәм шул ваҡыттан бирле Еңеү эстафетаһы йыл һайын ойошторола. Быйыл ул 150 команда ҡатнашлығында уҙҙы. Мәктәптәр, лицейҙар, гимназиялар араһында 1-се урынды - 158-се Башҡорт гимназияһы; колледждар һәм техникумдар араһында - Өфө эшҡыуарлыҡ экология һәм дизайн колледжы; юғары уҡыу йорттары араһында - Өфө дәүләт нефть техник университеты; предприятиелар араһында "Башнефть-Сервис НПЗ" командалары алды.

ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫНДА...

Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған тантана "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтте. Сарала Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм тыл хеҙмәтсәндәре, Махсус операция яугирҙары ҡатнашты.

Үҙенең сығышында Радий Хәбиров Еңеүгә Башҡортостан халҡы индергән өлөшкә айырым туҡталып үтте. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында республиканан 700 меңдән ашыу кеше фронтҡа китә, уларҙың 322 меңе кире әйләнеп ҡайта алмай. 200 меңдән ашыу яҡташыбыҙ орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә, 278-е Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Һуғыш осоронда республикаға 360 завод һәм фабрика эвакуациялана. Һәр өсөнсө хәрби самолет Өфө моторҙар эшләү заводы двигателдәре менән йыһазландырыла, һәр өсөнсө танк һәм самолет Башҡортостанда етештерелгән яғыулыҡ менән йөрөй һәм оса. Һуғыш йылдарында республиканан 36 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә.

СТӘРЛЕТАМАҠТА...

Стәрлетамаҡта Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы хөрмәтенә үткәрелгән парадта 29 парад расчеты һәм 45 берәмек техника ҡатнашҡан.

Ҡала хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, сараны 157 меңдән ашыу кеше ҡараған. Ленин проспекты буйлап ветерандар, студенттар, уҡыусы балалар, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре тантаналы марш менән үтә. Байрамды "Ура, Еңеү!" тип аталған театрлаштырылған вокаль-хореографик композиция биҙәй. Унда 750 кеше ҡатнашҡан. "Беҙ берҙәм һәм бер бөтөн!" программаһы менән спортсылар сығыш яһай. Ретро-техника колоннаһында "Победа", "Чайка", "Москвич 407", ГАЗ-21, ГАЗ-69, Луаз-969 М, ВАЗ 2101 машиналары үтә. Уларҙы заманса техника алмаштыра. Тантаналы сараның аҙағында ветерандар, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары 80 метрлыҡ Георгий таҫмаһы менән майҙандан үтә.

ЙЫЛАЙЫРҘА...

Йылайыр районында Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын байрам итеү сиктәрендә реставрациялағандан һуң Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында һәләк булған яугирҙар исемдәре теркәлгән мемориал асылды.

Яугир-яҡташтар һәйкәле хәрбиҙәрҙе символлаштырған композиция рәүешендә эшләнгән. Һалдатҡарҙың береһе буденовкала, ҡылыс тағҡан, икенсеһе автомат һәм каска менән һынландырылған. Мемориалдағы исемлеккә 8600-гә яҡын Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы яугирҙарҙың фамилияһы индерелгән. Бынан тыш, аллеяға һигеҙ Советтар Союзы Геройына стелалар һәм Махсус хәрби операцияла һәләк булғандарға таҡтаташтар ҡуйылған. Мемориалды яңыртыуға әҙерлек барышында район йәмәғәтселеге һәм ветерандар ойошмалары әүҙемселәре исемдәрҙе аныҡлау буйынса ҙур эш башҡарған.

РӘХМӘТЛЕ БЫУЫНДАН

Ғафури районының Ҡаранйылға ауылында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға Мемориал асылды.

Уны асыу тантанаһы "Үлемһеҙ полк" маршы менән башлана, сарала тирә-яҡ ауылдарҙан да халыҡ ҡатнаша. Муниципалитет башлығы Венер Вахитов билдәләүенсә, мемориал ташына тыуған ил өсөн ғүмерен биргән 120 һалдаттың һәм фронттан ҡайтырға насип булғандарҙың исемдәре уйып яҙылған. "Беҙгә тыныс күк аҫтында йәшәү мөмкинлеген биргән ата-бабаларыбыҙ тураһында хәтер һаҡларға бурыслыбыҙ. Бөгөн сарала балаларҙың ҡатнашыуы айырыуса мөһим, сөнки тап уларға һуғыш тураһында хәтерҙе һаҡларға һәм уны киләсәк быуындарға тапшырырға тура киләсәк. Мемориалды ҡуйыу инициаторҙарына һәм ҡатнашыусыларға тәрән рәхмәтемде белдерәм", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды етәксе.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын байрам иткән көндәрҙә Өфөнөң Ленин исемендәге майҙанында Махсус хәрби операция барышында трофей итеп алынған сит ил хәрби техникаһының күргәҙмәһе ойошторолдо. Өфө халҡына һәм баш ҡала ҡунаҡтарына Көнбайыш илдәрендә етештерелгән 10 берәмек хәрби техника тәҡдим ителде. Күргәҙмә экспозицияһы 12 майға тиклем эшләне.

✓9 майҙа Өфөнөң Ленин исемендәге майҙанында иң яҡшы парад расчетына смотр-конкурс үтте. Башҡортостан Башлығы Кубогына һәм Гран-приға Федераль яза башҡарыу хеҙмәте БР буйынса Идаралығы хеҙмәткәрҙәренең парад расчеты лайыҡ булды (расчет командиры - подполковник Анна Шендель). Дәүләм белем биреү ойошмалары араһында Рәсәй Геройы Александр Доставалов исемендәге Волга буйы федераль округының Башҡорт кадет корпусы тәрбиәләнеүселәренең парад расчеты Гран-при һәм Башҡортостан Башлығы Кубогын алды (майор Олег Лаврентьев).

✓Өфөнөң "Беренсе май" мәҙәниәт һәм ял паркында "Ете ҡыҙ" исемле яңы аллея булдырылды. "Ете ҡыҙ" социаль проектында ҡатнашыусылар, Махсус хәрби операция ветерандары һәм ҡатнашыусылары, МХО ветерандары ассоциацияһы, Өфө ҡалаһының "Ватанды һаҡлаусылар" фонды ағзалары 12 шыршы ултыртты. Аллея 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына, Рәсәйҙә иғлан ителгән Ватанды һаҡлаусылар йылына, Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү йылына арналған.

✓Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған "Еңеү вальсы" республика акцияһы үтте. Акцияла ҡатнашыусылар 8 майҙа "Беҙ - Бөйөк Еңеү вариҫтары!" лозунгы аҫтында Өфөнөң Совет майҙанына йыйылды. 2024 йылдан акцияның инициаторы - республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы. Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы акция икенсе тапҡыр үткәрелә.

✓Өфөнән Аделина Бикбулатова фехтование буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Финал алышында яҡташыбыҙ үҙенең дәғүәсеһе, Курсктан Полина Козаеваны, еңде. Осрашыу 15:3 иҫәбе менән тамамланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөлә тәүге тапҡыр ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында фехтование буйынса Рәсәй чемпионаты уҙҙы. Унда Рәсәйҙең 32 төбәгенән 654 спортсы көс һынашты. Башҡортостандан 68 спортсы ҡатнашты. Шулай уҡ ярышҡа Беларусь Республикаһы, Ҡазағстан һәм Ҡырғызстан вәкилдәре килгәйне.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ ***Башҡортостан тигән республикала йәшәгәс, башҡортса аралаша, һөйләшә башлаһағыҙ, һәр бер башҡорт һеҙҙе яратып ҡабул итер, хөрмәт менән ҡарар, тип өҫтәйем.***

ЗИНЬЕН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Алатүбә, ҙур күгәрсен
(Вяхирь, витютень)

Ҡырағай күгәрсендән эрерәк. Ҡанатында, шулай уҡ оло ҡоштарҙың муйынында сағыу аҡ таптары бар. Суҡышы - һары, түше - алһыуыраҡ, ҡойроғоноң аҫҡы яғы буйлы аҡ һыҙатлы. Тауышы - көслө, 3-5 ижектән торған ҡатмарлы саҡырыуҙан ғибәрәт, һүҙҙәргә әйләндереп әйткәндә "ниүки-ту... ни-ки-ту...ви-дел" тип ишетелә.

Ҡараңғы урмандарҙа, һирәгерәк парктарҙа оя ҡора. Мәҫәлән, 2004 йылдың майында "Красноусол" санаторийының паркындағы шыршы ағастарында бер пар алатуба йәшәй ине. Ата ҡоштоң электр баҫаналһына ултырып һайрауы хатта ял итеүселәрҙе ҡурҡытты.

Былай алатүбә - республиканың бөтөн урынында ла оя ҡороп йәшәүсе ғәҙәти ҡош. Ул бары Уралдың таулы-урманлы өлөшөндә генә осрамай. Баҫыу эштәре барған мәлдә уларҙы күрергә була. Өфөнөң парктарында ла йыш осрай.

Башҡа ҡырағай күгәрсендәр кеүек туҡлана, унда үҫемлек орлоҡтары өҫтөнлөк итә.

Әбersен, ҡыр күгәрсене
(Обыкновенная горлица)

Күк күгәрсендән вағыраҡ, уға ҡарағанда һомғолораҡ та. Арҡа өлөшө тәңкә һүрәтле көрәнерәк, түше, эс өлөшө күгелйем-алһыу, ҡойроғо - ҡара, ситенән аҡ һыҙат үткән. Оло ҡоштарҙың муйынында аҡлы-ҡаралы арҡыры буйҙар бар. Ата ҡош эрерәк, ә бына төҫтәре менән улар айырылмай. Ике ижектән торған һайрауы "турр-турр" тип ишетелә. Ҡанатын ныҡ ҡағып, тауышланып осоп китә.

Урал алды һәм Уралдың көньяҡ өлөшөндә ғәҙәти ҡош. Урманлы-таулы райондарҙа осрамай.

Йылы яҡтан осоп ҡайтҡан мәле - төн. Был апрель аҙағы - май башына тура килә. Ерҙән 2-3 метр бейеклегендә урынлашҡан ағас ботаҡтарына оя ҡора. Ояһы тәрилкә формаһында, аҫтан ҡарағанда үтә күренеп тора. 2 йомортҡа һала. Сиратлап баҫалар. 13-16 тәүлектән балалары сыға. 2 аҙналыҡ бала ҡош оса башлай, быға тиклем уларҙы инәһе менән атаһы ризыҡ ташып ашата.

Төрлө үҫемлектәрҙең орлоғо менән туҡлана. Яҙын шытҡан орлоҡто ла сүпләй. Умыртҡаһыҙҙарҙы ла тотоп ашай. Иртәле-кисле һыу сығанағына барып һыу эсә.

Йәй аҙағында яңғыҙ ҙа, тупланып та йәшәй. Ҡышлау урындарына бергәрәк осалар, төнгөлөккә туҡтаған ерҙәрендә ҡоштарҙың һаны йөҙҙән ашып китә. Баҫыуҙарға туҡтап ашап, бағаналарға, ағас ботаҡтарына ҡунып ял итә-итә осалар. Африкала ҡышлайҙар.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

ТУҒАН ТЕЛГӘ ҺӨЙӨҮ...

ғаиләнән дә, мәктәптән дә башлана

Рәйсә КҮЗБӘКОВА, Рәсәй Федерацияһының Почетлы мәғариф хеҙмәткәре: Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының II Бөтә Рәсәй съезы сиктәрендә Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында ойоштороlған майҙансыҡҡа йәш педагогтар - 35 йәшкә тиклемге башҡорт теле уҡытыусылары саҡырылғайны.

Секция ултырышын республиканың башҡорт теле һәм әҙәбиәте һәм башҡа туған телдәр ассоциацияһы етәксеһе Рифат Риф улы Әйүпов асты һәм йәш уҡытыусыларға бөгөн республикала күрһәтелгән дәүләт ярҙамы тураһында һөйләне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дәүләт ярҙамы әллә ни маҡтанырлыҡ булмауы асыҡланды. Бөгөн йәштәрҙең мәктәпкә килмәүе, килергә теләмәүе билдәле. Мәктәптәр башҡорт теле уҡытыусыларына ғына түгел, башланғыс класс, математика, рус теле уҡытыусыларына ла ҡытлыҡ кисерә. Съезд делегаттары йәш уҡытыусылар менән эшләүгә, уларҙың профессиональ кимәлен үҫтереүгә арналған махсус дәүләт программаһы эшләргә кәрәк тигән фекергә килде. Рифат Риф улы шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһына ла етди үҙгәрештәр индереү һәм тиҙ арала балаларҙың телмәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән уҡыу әсбаптары, методик ҡулланмалар эшләү кәрәклеген билдәләне.

Билдәле булыуынса, 90-сы йылдар башында мәктәп директорҙары, уҡытыусылар "Башҡорт балалары уҡытыусы йәки врач ҡына түгел, ә нефтсе, инженер, физик та булырға тейеш", тигән идеяны күтәреп сыҡты һәм яҡшы уҡыған, тырыш балаларҙы артабан уҡыу өсөн техник юғары уҡыу йорттарына инергә өгөтләй башланы. Яҡшы ниәт менән башланған был эштә лә сама тигән нәмә юғалды, һөҙөмтәлә киләсәктә халҡыбыҙҙы үҫтерерҙәй шәхестәр нефтсе, юрист, инженер һәм башҡа "модалы" һөнәрҙәр һайлап, төрлө сәнәғәт учреждениеларына, судтарға инеп сумдылар һәм халыҡ өсөн улар юғалды. Уҡытыусы һөнәрен һайлаусылар ҡырҡа кәмене, һайлағандары ла мәктәптә эшләүгә ҡарағанда башҡа аҡсалыраҡ урынды хуп күрҙе. Һөҙөмтәлә төплө белем бирергә һәләтле уҡытыусылар етешмәй. Ә бит уйлап ҡараһаң, уҡытыусы иң кәрәкле һөнәр - ул киләсәк кешеһен тәрбиәләй.

Секция ултырышын йомғаҡлап, БДПУ-ның башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире Сәлимә Айбулат ҡыҙы Таһирова башҡорт теле уҡытыусыларының I съезы ҡарары нигеҙендә БДПУ-ла методика буйынса аспирантура асылыуы тураһында белдерҙе һәм йәш уҡытыусыларҙы аспирантураға уҡырға саҡырҙы.

Фәнзил Санъяров, филология фәндәре кандидаты, мәғариф ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы: Педагогик хеҙмәтемдә тел проблемалары төп урында торҙо, тип әйтә алам. Әлеге ваҡытта Өфө һөнәри педагогия колледжында эшләйем, буласаҡ уҡытыусыларҙы әҙерләйбеҙ. Үҙ тәжрибәмдән сығып, бына ни әйтергә теләйем. Республикабыҙҙа төрлө милләт кешеләре йәшәй, беҙҙең колледжда рустар, башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, башҡа милли сығышлы студенттар бар. Улар менән аралашҡанда һәр береһенән: "Һеҙҙең телегеҙҙә "һаумыһығыҙ" нисек яңғырай?"- тип һорайым. Һәр береһе үҙ телендә яуап бирә. Шунан үҙемдең теләгемде лә еткерәм: "Бер ҡасан да милли сығышығыҙҙы йәшермәгеҙ, милләтегеҙҙе яратһағыҙ, телегеҙҙән оялмаһағыҙ, халҡығыҙ ҙа үҙегеҙҙе яратыр, тим. Башҡортостан тигән республикала йәшәгәс, башҡортса аралаша, һөйләшә башлаһағыҙ, һәр бер башҡорт һеҙҙе яратып ҡабул итер, хөрмәт менән ҡарар, тип өҫтәйем. Шунан уларҙан иҫәнләшеү һүҙҙәрен отоп алып, шул телдә ҡабатлап та күрһәтәм. Эй шул саҡта студенттарымдың йөҙҙәре нисек балҡып киткәнен күрһәгеҙ ине. Бының менән шуны әйтергә теләйем: телгә ихтирам тәрбиәләй алһаҡ, бер тел дә юғалмаҫ. Ә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙа проблемалар етерлек, әммә уларҙы хәл итә алыу үҙебеҙҙән тора. Дәүләттең, мәғариф органдарының, йәмәғәтселектең, ата-әсәләрҙең берҙәм эш итеүе фарыз, шул саҡта һөҙөмтәләр ҙә ыңғай буласаҡ.

Гүзәл ХӨСӘЙЕНОВА, Белорет педколледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы: Башҡорт телен уҡытыуҙағы төп проблема - ваҡыт етмәүе. Уҡытыусы дәрестә өйрәткән һүҙҙәр, һөйләмдәр аҙна үтеүгә онотола бара, уҡыусыларҙың хәтеренән юғала. Башҡортса йәнле аралашыу мөхите юҡҡа иҫәп бит инде, хатта башҡорт ғаиләләрендә лә туған телдә һөйләшеү бик аҙ, рус теле өҫтөнлөк итә. Уҡытыу алымдарына килгәндә, балаларҙы ябай ғына темалар буйынса һөйләшергә өйрәтеү беренсе планға ҡуйылырға тейеш. Ауыл мөхитендә үҫкән бала бәләкәй саҡтан туған телен белә, һөйбәт кенә һөйләй, аңлата ала. Ҡала ерлегендә, бигерәк тә башҡа милләт балаларына башҡорт телен уҡытҡанда, башҡортса һөйләшергә өйрәтеү төп маҡсат булырға тейеш. Бының өсөн программаларҙы яңынан ҡарап сығып, мотлаҡ үҙгәртергә кәрәк.

Фәнгизә Нафиҡова, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы: Башҡалабыҙҙың Максим Горький исемендәге 3-сө гимназияһында башҡот теле уҡытыусыһы булып 23 йыл эшләйем. Был мәктәптә төрлө милләт балалары уҡый, шуға күрә бында башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Әлбиттә, сәғәттәр һаны күберәк булһа, уҡытыусыға күпкә еңелерәк булыр ине. Әммә был әлегә тик теләк кенә булып ҡала. Эшебеҙ һөҙөмтәһе уҡытыусының үҙенән тора - дәрес биреү генә етмәй, ижади ҡараш кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр, балалар телде өйрәнергә теләп бармай, уҡытыуы ауыр, тип зарлана. Тимәк, улар уҡыусыларын ылыҡтыра алмай. Ошо йәһәттән уңдым: уҡыусыларым телебеҙҙе ихлас өйрәнде, уларҙы башҡортса апаруҡ һөйләшергә лә өйрәтә алдым. Ата-әсәләр яғынан да әллә ниндәй ҡаршылыҡтар булманы. Әгәр һин үҙең эшеңдән ҡәнәғәт булмайһың икән, уҡыусыларың да шатланып-ҡанатланып уҡымаясаҡ. Башҡорт теле дәрестәрендә уйындар, инсценировкалар, төрлө конкурстар, ярыштар ойоштора алһаң, ят телде өйрәнеү балаларға тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ буласаҡ.

Фәриҙә Әхмәрова, педагогик хеҙмәт ветераны, методист: Туған телдәрҙе, шул иҫәптән башҡорт телен уҡытыуҙағы төп проблема - туған телдә аралашыу мөхитенең үтә тар булыуында. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыш ҡына йәш ғаиләләр үҙҙәренең туған теленә илтифатһыҙ ҡала, балаларын нисек тә булһа үҙ теленә өйрәтеүҙе тормош маҡсаты итеп ҡуймай. Туған телен бөтөнләйгә белмәгән балаларҙы уҡытыуы ауырға төшә. Хатта башҡорт мәктәрендә лә балалар үҙ-ара русса һөйләшеүен дауам итә. Бер саҡ әйтелгәйне былай тип: туған телде өйрәнеү модаға инергә тейеш, тип. Әгәр шуға өлгәшә алһаҡ, был өлкәлә, һис шикһеҙ, алға китеш булыр.

✓ ***Башҡорттарҙан 4 полк төҙөп, уларҙы Варшаваға һәм Кавказға хеҙмәткә ебәреү хаҡында ла юллама ебәрелә. Әммә быға ризалыҡ бирелмәй.***

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

(Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)

А.А. Катенин

(1858 - 1860 йылдарҙа Ырымбур генерал-губернаторы булған)

Перовскийҙан һуң Ырымбур губернаторы итеп генерал-адъютант Александр Андреевич Катенин тәғәйенләнде. Ул төбәк менән танышыу өсөн бында 1857 йылдың ғинуар айында уҡ булып киткәйне. Ырымбурға килеү менән, далаға сығып, яңы биләмәләрҙе ҡарап, танышып йөрөнө.

1858 йылдың декабрендә ул отчет менән Петербургҡа барҙы, мине лә, башҡа бер чиновниктар менән бер рәттән, үҙенең канцелярияһында иррегуляр казак һәм башҡорт ғәскәре бүлеге начальнигы булараҡ, үҙе менән алып барҙы. Бында канцелярия идараһы башлығы Адам Антонович Арцимович, унан башҡа чиновниктарҙан Василий Васильевич Григорьев, полковник Дандевиль, Галкин, Пасмуров, Северцов, Тимашев, адъютант полковник Безносиков, ротмистр Миллер булды.

Катениндың далаға сәфәр ҡылған сағында Ырымбурҙан Һырдарьяға, Бохара һәм Хиваға дипломатик илселек ебәрелде. Илселекте флигель-адъютант, полковник Игнатьев етәкләне, ул һуңынан Төркиәлә илсе вазифаһында эшләне. Был илселек составында Катенин канцелярияһында эшләгән Галкин да булды, ул сик буйы бүлеге начальнигы ине.

Катениндың Петербургҡа алып килгән кешеләре уның проекттарын ғәмәлгә ашырыу буйынса бурыстарын үтәргә тейеш ине, әммә ул теләгән нәмәләрҙең барыһын да үтәү мөмкинлеге булманы.

Император ғәли йәһәптәренең дежурныйы булараҡ, ул батшаға генерал-губернатор ярҙамсыһы вазифаһына башҡорт ғәскәре командующийы, генерал-лейтенант Балкашинды тәғәйенләү тураһындағы үтенес менән хат тапшыра. Ныҡ ҡартайған генерал башҡорт ғәскәре етәксеһе вазифаһын башҡара алмай, уның урынына Петербургтағы корпус штабының дежур штаб-офицеры, полковник Рейнтерҙы тәғәйенләү хаҡында һорала. Ғәли йәһәптәре генерал-губернатор докладына ризалыҡ белдерә, әммә был Катенин теләгәнсә килеп сыҡмай. Катенин Ырымбурҙа булмаған саҡта генерал-губернатор вазифаһын үтәү уның ҡарамағында булған генералдарҙың береһенең башҡара алыуы рөхсәт ителә, улар иҫәбендә генерал-лейтенант Балкашин һәм генерал-майор Ладыженский була; берәнсеһе, Катениндың урынбаҫары, тиҙҙән вафат булып ҡала, ә икенсеһе губернатор Безак ваҡытында ла хеҙмәтен дауам итә.

Катенин Петербугта булған саҡта Урта Азия тарафтарына хәрәкәт итеү, унда полковник Дандевиль етәкселегендә Төркмән төбәгенә махсус отряд ебәреү тураһында план төҙөлә.

Башҡорттарҙан 4 полк төҙөп, уларҙы Варшаваға һәм Кавказға хеҙмәткә ебәреү хаҡында ла юллама ебәрелә. Әммә быға ризалыҡ бирелмәй. Был фекерҙе Балкашин белдерә; уны ваҡытында Перовский ҙа хуплай, ул башҡорттарҙы хәрби сословиела ҡалдырыу яғында була. Казак ғәскәрҙәренең баш идаралығы начальнигы, генерал-лейтенант Веревкинға ошо мәсьәлә буйынса аңлатма биргәндә, шәхсән үҙем Катенинға башҡорттарҙы Варшаваға ла, Кавказға ла ебәрергә кәрәкмәү тураһында белдергәнемде әйттем. 1831 йылдағы поляк кампанияһын етәкләгән начальство башҡорттарҙың казак хеҙмәтенә яраҡһыҙ булыуы хаҡында белдергән (Күрәһең, башҡорттар батшалыҡҡа ҡаршы көрәшкән поляктарҙы баҫтырыуҙы өнәп бөтмәгәндер. - **Тәрж. иҫк.**)

Ошо тәҡдим ҡабул ителмәгәндән һуң Ырымбурға хәрби-строевой әҙерлек алып барыу маҡсатында армия кавалерияһының 4 штаб һәм 10 обер-офицеры ебәрелде; уларҙан бер нисә кеше йәйге 2 - 3 ай буйына Ырымбур өйәҙенең Аллабирҙе ауылы янында урынлашҡан уҡыу полкында булдылар; бындағы киң ерҙәр башҡорттарҙан һатып алынғайны. Һуңынан штаб-офицерҙарҙың барыһы ла тиерлек (Гюбенет, Гвоздаков, Броссе, Базилев) башҡорт кантондарының попечителдәре, ә обер-офицерҙар кантон начальниктары итеп тәғәйенләнде.

Генерал-губернаторҙың 1858 йылда Петербургҡа барыуынан бер фәтеүә лә булманы. Май айында, Ырымбурға ҡайтҡас, ул үҙенең башҡа бер ниәттәрен ғәмәлгә ашырыу менән булышты, 1859 йылдың аҙағында Һырдарья буйына хәрби поход ойоштороу маҡсатында тағы ла Петербургҡа барып ҡайтты, әммә унда хуплау тапманы. 1860 йылда Катенин Уральск ҡәлғәһенә ғәскәрҙе ҡарарға барҙы, артабан Гурьев ҡаласығына ла барып етте.

Генерал-адъютант Катенин Уральск ҡалаһынан сирләп ҡайтты һәм 1860 йылда вафат булды. Ул үпкәһенә һыуыҡ тейҙергән була. Александр Андреевичтың үлеме ҡала кешеләренә һәм яҡын-тирәләге халыҡҡа ныҡ тәҫирле булды: ҡала кешеләре уның мәйете һалынған арбаны үҙҙәре Петропавел сиркәүенә тиклем һөйрәп алып барҙылар, уның табутын граф Сухтелен маҙары янына ҡуйҙылар; аҙаҡ вафат булыусының кәүҙәһен Кострома губернаһының Кинешмә өйәҙенә алып ҡайттылар.

Катенин генерал-губернатор вазифаһында ике йылдан да артыҡ булманы, бик күп ниәттәре булды, әммә уның ваҡытһыҙ үлеме арҡаһында улар ғәмәлгә ашырылмай ҡалды. Уның булышлығында ошо төбәкте ике өлөшкә - Ырымбур һәм Өфө губерналарына бүлеү башланғысы хупланды; Ырымбурға казак ғәскәрҙәре һәм линия буйы өйәҙҙәре өсөн айырым епископ килтерелде, уға башҡа бер милләт кешеләрен христиан диненә дүндереү бурысы ла йөкмәтелде, быныҡ өсөн шул кешеләрҙән йыйылған һалым иҫәбенән 3 мең һум көмөш тәнкә бүленде.

Катенинға үҙе тәғәйенләнгән саҡта уҡ Ырымбур һәм Урал ғәскәре капиталынан, башҡорттарҙан һәм ҡырғыҙҙарҙан алынған һалымдан экстраординар сығымдар өсөн 28 мең һум көмөш тәнкә аҡса тотоноу рөхсәт ителде. Ул ошо аҡсаларҙы нисек тотоноуы хаҡында Петербургта батша ғәли йәһәптәренең үҙенә отчет бирҙе.

Катенин һәр саҡта ла башҡалар менән яғымлы булды. Ҡайһы бер мәжлестәрҙә ул мине, ҡулымдан тотоп алып килеп, шампанский менән һыйлай торғайны.

Канцелярия башлығы итеп минең бүлектә өҫтәл начальнигы булып эшләгән Тарасов ҡуйылғас, ул минең эшем менән ҡәнәғәт булмай башланы. Мин канцелярия хеҙмәтенән китеү хаҡында ғариза бирергә мәжбүр булдым. Катенин ваҡытында бындай хәл булмаҫ ине. Генерал-губернатор Безак килгәс, мин Ырымбур өйәҙе башҡорттары попечителе вазифаһына күстем.

Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.

(Дауамы бар).

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ

XVIII быуатта тарханлыҡ исемен биреү һәм уларҙы теркәү билдәле бер юлға һалынған. 1734 йылда Хөкүмәт Сенаты указы менән тарханларҙы иҫәпкә алыуҙың һәм теркәүҙең Өфө канцелярияһында яңы тарханлыҡ кенәгәһе булдырылған. Бында иһә кемдең ҡасан, ни өсөн тарханлыҡ исеме алыуы, уның башҡарған хеҙмәттәре тураһында мәғлүмәттәр яҙылған. Ошо кенәгә буйынса һәм тарханлыҡ грамоталарына ҡарағанда, Өфө воеводалығында 773 кешенең тархан икәнлеге күренә. Был сағыштырмаса ҙур һан, әлбиттә. Күрәһең, XVIII быуатта, башҡорт ихтилалдары ҡыҙған заманда, батша яҡлы тоғро башҡорт түрәләренә тархан исемен биреү, улар ярҙамында халыҡ яуын тиҙерәк баҫтырыу маҡсаты арҡаһында был һан ныҡ артҡандыр. 1760-1765 йылдарҙағы мәғлүмәттәр башҡорт тарханларының 636 -654 тирәһендә тирбәлеүен һөйләй. Ә 1767 йылда Өфө һәм Исәт провинцияларында 443 тархан йорт-ғаиләләре барлығы теркәлгән. 1770-1771 йылдарҙа Өфө канцелярияһы ведомосында тархан йорттарының (двор) 344-кә төшкәнлеге күренә. Игенселек кәсебе артҡан Ҡазан, Уса, Себер юлдарында тарханлар һаны кәмегәнлеге күҙәтелә.

Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.
"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.
(Дауамы бар).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

БАШҠОРТТАР

Шөғөлдәре һәм йәшәү рәүеше

Башҡорттарҙың төп шөғөлө һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ, балыҡсылыҡ, солоҡсолоҡ, малсылыҡ һәм ер эшкәртеү булған. Тәбиғәт шарттарына бәйле, бер районда бер шөғөлгә өҫтөнлөк бирелһә, икенсе райондарҙа икенсе эште хуп күргәндәр. Ваҡыт үтеү менән Башҡортостан территорияһына Волга буйы халыҡтары (татарҙар, мишәрҙәр, мариҙар һ.б.) һәм бигерәк тә ул ваҡытҡа юғары ер эшкәртеү мәҙәниәтенә эйә рустар күсенеп килгәс һәм башҡорттар үҙҙәре лә ерҙәрен эшкәртә башлағас, һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ, балыҡсылыҡ, солоҡсолоҡ яйлап үҙенең әһәмиәтен юғалта башлай. Ялан райондарында өҫтөнлөклө булған мал көтөү ваҡыты-ваҡыты менән кәмеп, шунан ҡабат тергеҙелеп, был райондарҙың төп шөғөлө булып ҡала. Ер эшкәртеү, йорт хайуандарын үҫтереү менән бер рәттән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары хужалығының төп тармағы була һәм башҡорттарҙың хужалыҡ тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә булып, киң таралыу ала. Башҡорттарҙың ерһеҙ ҡалыуының эҙемтәһе булып малдарҙы көтөүлектәрҙә көтөү осраҡтары кәмей, ялан райондарында ла ер эшкәртеү яйлап үҫеш ала, ә XX быуатта инде барлыҡ башҡорттарҙың да төп шөғөлө булып китә.

Башҡорттарҙың күсмә көнкүреше тураһындағы күҙаллауҙар саманан арттырылып ебәрелгән. Хатта XVIII быуат башында бары тик Себер һәм Нуғай даруғаларының башҡорттары ғына ярым күсмә тормош алып бара, Ҡаҙан даруғаһы башҡорттарының яртыһы ғына ҡуналҡаға (йәйләүгә йәки ҡышлауға) сыҡҡан, Уса даруғаһы башҡорттары тулыһынса ултыраҡ тормош алып барған.

Йәйләүгә башҡорттар, нигеҙҙә, апрель һуңында, май башында сыҡҡан һәм урынға бәйле сентябрь йәки октябрь һуңына тиклем шунда булғандар. Йәй дауамында һәр ғаилә йәйләү урынын өс йәки дүрт тапҡыр алыштырған. Ғәҙәттә, ҡышҡылыҡҡа ҡышлау тирәһендә үләнде һаҡлап ҡалдырыу маҡсатынан йәйләүҙе мөмкин тиклем ауылдан алыҫтараҡ урынлаштырғандар. Һуңынан инде ауылдар һәм йәйләү урындары араһы яйлап ҡыҫҡара барған. Әгәр XVIII быуат һуңында йәйләүҙәр ҡышлау урынынан 100 саҡырым алыҫлыҡта булһа, XIX бауыт аҙағында - XX быуат башында, аҫаба ерҙәр күләме кәмеү һөҙөмтәһендә, бары тик ҡайһы бер ергә байыраҡ ырыуҙар ғына 30-50 саҡырым алыҫлыҡта йәйләү мөмкинлегенә эйә булған. Ер эшкәтреү үҫеш алғас, яландарҙы көтөүлектәрҙән айырыу мохтажлығы тыуған һәм был баҫыуҙар (көтөү йөрөгән ерҙәр кәртәләп алынған) барлыҡҡа килеүенә сәбәп булған.

Тәүҙә көндөҙ һауырға алып ҡайтылған мал төн сыҡҡансы хатта баҫыуҙарҙың 6-8 саҡырымда булған сигенә барып та етә алмаған. Шуға күрә, уның алыҫтағы сигендә үләп матур үҫкән, ә яҡындағыһын мал ашап бөткән. Элек йәйләү булған ерҙәр һөрөлгәс, башҡорттар йәйҙең икенсе яртыһында ауыл баҫыуының алыҫтағы майҙанына күсенгән, уңыш йыйып алынғас, баҫыу сиктәренә сыҡҡан.

(Дауамы бар).

АТАЙЫМ ХАЛҠЫНА

Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Социалистик Хеҙмәт Геройы, Башҡортостандың халыҡ шағиры, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ленин премияһы, СССР ҙың Дәүләт премияһы, РСФСР-ҙың К. С. Станиславский исемендәге дәүләт премияһы, Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, М. А. Шолохов исемендәге премия лауреаты Мостафа Сафа улы Кәримовтың ҡыҙы, Мостай Кәрим исемендәге Фонд директоры Әлфиә Мостай ҡыҙы КӘРИМОВА.

Әлфиә Мостай ҡыҙы, һеҙ - Өфө ҡыҙы, тәүҙә үҙегеҙҙең бала саҡ хәтирәләреге менән бүлешеп китһәгеҙ ине.

- Мин һуғыштан һуң тыуғанмын. Бала сағым бик бәхетле булды. Коммуналь фатирҙа йәшәүебеҙ, әсәйемдең дөйөм кухняла ашарға әҙерләү мәлдәре хәтеремдә ҡалған. Күршебеҙҙә бер ҡарт менән әбей йәшәне, уларҙың балалары булмағандыр инде, мине талантын тулыһынса асып та бөтмәне, тип иҫәпләйем.

Беҙгә атайымдың дуҫтары, ҡунаҡтар йыш килеп йөрөнө. Мин бәләкәй булғас, уларҙың ниндәй олуғ шәхестәр булыуын аңлап та етмәгәнмендәр ул саҡта. Ғилемдар Рамазанов, Кирәй Мәргән, Муса Ғәли, Баязит Бикбай, Сәғит Агиш, Назар Нәжми кеүек яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы бәләкәй саҡтан күреп үҫтем, улар беҙҙең ғаиләбеҙҙең дуҫтары булып киткән. Улар ғүмерҙәре буйына дуҫ булып йәшәне. Беҙҙә атайымдың шиғырҙарын рус теленә тәржемә итеүсе Михаил Дудин да бер нисә тапҡыр булды. Шулай уҡ атайымдың иң яҡын шағир дуҫтарынан Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Давид Кугультиновтарҙы бала сағымдан уҡ күреп белә инем. Давид ағай йомоғораҡ булһа (бәлки, балалары булмағанғалыр, тим), Рәсүл Ғамзатов холоҡ-фиғеле менән атайыма оҡшап, киң күңелле, асыҡ йөҙлө ине. Өфөлә төрлө халыҡтарҙың әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре үтә торғайны бит, Молдавиянан, Украинанан, башҡа республикаларҙан килгән шағирҙар беҙҙә ҡунаҡта булғаны хәтерҙә ҡалған. Атайымдың дуҫтары ул өйҙә булмаған саҡта ла өйөбөҙгә килеп, күрешеп, хәл белешеп сыға торғайны, әсәйем уларҙы барынса ҡунаҡ итеп, һый-хөрмәт күрһәтер ине.

Һеҙ һөнәрегеҙ буйынса филолог, әҙәбиәткә яҡын кеше, тип әйтергә булалыр...

- Мин тәүҙә Өфөнөң 39-сы мәктәбендә уҡый башлағайным, физика, математика фәндәрен ярата инем. Өфөлә инглиз мәктәбе асылғас, ул хәҙер 91-се мәктәп тип атала, шунда күстем. Мәктәпте тамамлағас, БДУ-ның сит телдәр факультетына уҡырға индем. Уны тамамлағас, Өфө авиация институтының сит телдәр кафедраһында эш башланым. Әлбиттә, рус әҙәбиәтен дә, башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрен дә яратып уҡыйым, үҙемде әҙәбиәткә яҡын кеше тип иҫәпләйем.

Атайығыҙ һеҙҙең ҡайҙа һәм нисек уҡыуығыҙға йүнәлеш бирә инеме?

- Юҡ, ул беҙҙе һәр саҡта ла үҙ иркебеҙгә ҡуйҙы. Беҙ шундай мөхиттә үҫтек: белем алыу, ғилемле булыу беренсе планда булды. Беҙҙең ғаиләлә балаларҙы үҙаллы йәшәргә өйрәттеләр, күп нәмәне үҙебеҙ хәл итә инек.

Атайығыҙ һеҙҙең икенсе милләт кешеһенә кейәүгә сығыуығыҙға ҡаршы булманымы?

- Әлбиттә, мин башҡорт егетенә тормошҡа сыҡһам, атайыма яҡыныраҡ та булыр ине. Әммә шулай килеп сыҡты инде. Тормош иптәшем Олег Балабан сығышы менән Украинанан, уның атаһы - поляк йәһүдиҙәре нәҫеленән. Ул башҡорт әҙәбиәтен бик ярата һәм һәйбәт белә. Шуға ла ул ҡайныһы менән уртаҡ тел тапты, уның яратҡан кейәүе булды.

Атайығыҙ башҡа кешеләр менән аралашҡанда үҙен нисегерәк тотто?

- Уның аралашыу даирәһе бик киң ине. Кешеләр менән мөнәсәбәттәрендә үҙен ғәҙел һәм бик ипле тота белде ул. Абруйлы шәхес булғас, ҡайһы бер кешеләр уның алдында базабыраҡ та ҡалғандыр. Әммә ул һәр саҡта ла ябай булып ҡалды, шуның өсөн дә уның менән аралашҡан кеше тиҙ генә асылып китә ине. Ғөмүмән, атайыма килеп, үҙ йомоштары менән мөрәжәғәт итеүселәр күп булды. Шулай ҙа уның бер тормош ҡағиҙәһе булды: "Өйөбөҙҙөң ишеге һәр кемгә асыҡ, әммә күңелемде теләһә кемгә аса алмайым", - ти ине ул. Әсәйебеҙ ҙә ҡунаҡтарҙы ихлас ҡаршы алды, уның аш табынына йәһәтләп ҡуйыр ризығы ла һәр саҡ әҙер булды. Улар Илгиз менән икебеҙҙе шулай үҙ өлгөләрендә башҡалар менән ихтирамлы итеп аралашырға өйрәтә алды.

Атайым кешелекле булды, башҡалар менән аралашҡанда уларҙы биләгән вазифаһына ҡарап айырманы. Әлбиттә, вазифалы кешеләр менән дә яҡындан таныш ине. Заманында партия Өлкә комитетының беренсе секретары булған Зия Нуриев ағайҙы атайым бик ныҡ хөрмәт итте. Биләгән вазифаһы өсөн түгел - Зия Нуриев киң ҡарашлы, мәҙәниәтле етәкселәрҙең береһе ине. Ундайҙар һирәк була. Шулай уҡ заманында партия Өлкә комитетының беренсе секретары булған, Башҡортостандың мәҙәниәтен үҫтереүгә күп көс һалған Семен Игнатьевты ла маҡтап телгә ала ине атайым. Ул идара иткән ваҡытта, 1955 йылда, Мәскәүҙә Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһы уҙғарыла. Әлбиттә, вазифалы кешеләрҙең дә төрлөһө була. Бына атайымдың "Ташлама утты, Прометей" пьесаһын, мәҫәлән, тап Өлкә комитеттағы вазифалы бер кешенең "тырышлығы" арҡаһында сәхнәгә сығармай байтаҡ тоттолар. Ул кешегә Зевс образы оҡшамаған икән, унда Брежневтыңмы, Сусловтыңмы һыҙаттары сағылған, имеш.

Шуныһы фәһемлелер: Мостай Кәрим антик донъя геройҙарын хәҙерге заман менән тоташтыра алған...

- Эйе, ул бик күп уҡыны, антик донъя мифтарын, ул заман әҙәбиәтен яҡшы белде. Мемуар жанрында яҙылған әҫәрҙәрҙе уҡырға ярата ине. Күп ерҙәрҙә булды, әммә барыбер Башҡортостанды, башҡорт халҡын, уның тарихын күңеле менән яҡыныраҡ ҡабул итте, үҙен ысын башҡорт шағиры итеп таныттым. Башҡорт әҙәби телен бөтөн нескәлектәрендә үҙләштерә алған, уны һаҡлауға, үҫтереүгә күп көс һалған шәхес ул. Мин ҡайһы саҡта, атайым башҡорт әҙәби телен нисек шулай яҡшы өйрәнә алған икән, тип, ғәжәпләнеп, аптырап ҡуям. Бында институттың филология факультетында уҡыуы ла ҙур роль уйнағандыр, унда бик көслө, киң белемле уҡытыусылар эшләгән бит.

Мостафа Сафа улы ауыл мөхитендә үҫкән, уның ауыл кешеләренә айырым бер ихтирамлы ҡарашы байтаҡ ҡына әҫәрҙәрендә сағыла...



Атайымдың иң яҡын шағир дуҫтарынан Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Давид Кугультиновтарҙы бала сағымдан уҡ күреп белә инем. Давид ағай йомоғораҡ булһа (бәлки, балалары булмағанғалыр, тим), Рәсүл Ғамзатов холоҡ-фиғеле менән атайыма оҡшап, киң күңелле, асыҡ йөҙлө ине. Өфөлә төрлө халыҡтарҙың әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре үтә торғайны бит, Молдавиянан, Украинанан, башҡа республикаларҙан килгән шағирҙар беҙҙә ҡунаҡта булғаны хәтерҙә ҡалған.

мәңгелек

ҺӘМ ҮҘЕНӘ...

Һәйкәл ҡойҙо

- Эйе, атайым Башҡортостандың барса райондарын йөрөп сыҡты, уның һәр төбәген яратты, әммә Урал аръяғы райондарын бигерәк тә яҡын күрҙе. Ысынлап та, уның әҫәрҙәренең төп геройҙары - ауыл кешеләре, тәртипле, ихлас, асыҡ йөҙлө шәхестәр.

Мостафа Сафа улы менән Рауза апайҙың ғаилә мөнәсәбәттәрен, уларҙың бер-береһенә мөхәббәтле булыуҙарын өлгө итеп ҡуйырға булалыр ул. Рауза апай шундай тотанаҡлы, ябай, яғымлы, матур ҡатын булып иҫтә ҡалған.

- Эйе, тап шулай йәшәне улар. Әсәйем үҙен баҫалҡы тота белде, атайым менән уның араһында һис бер ҡасан ҡырын ҡараш йә иһә аңлашылмаусылыҡ булманы. Уларҙың бер-береһенә асыуланышып, үпкәләп йөрөгән саҡтарын бөтөнләй хәтерләмәйем. Атайым әҫәйемде ғүмере буйына яратты, мөхәббәттәре оҙон ғүмерле булды. Әсәйем мырҙалар нәҫеленән, бик зыялы заттарҙан була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ата-әсәһе репрессияға эләгеп, Себерҙән кире ҡайтмай. Әсәйем Кушнаренко районының Баҡай ауылында тыуып үҫкән,12 йәшендә етем ҡалһа ла, тормош ауырлыҡтарына бирешмәй йәшәгән. Әйткәндәй, күренекле башҡорт актрисаһы, шағирә Рәғиҙә Янбулатова әсәйемдең атаһы Суфиян олатайымдың яҡын ғына туғаны була. Атайым менән әсәйем һуғыштан алда Өфө ҡалаһында таныша, ғүмерлек мөхәббәттәре лә, уртаҡ яҙмыштары ла баш ҡалабыҙ менән бәйле.

Әсәйем ғаиләбеҙҙә атай абруйын ныҡ һаҡланы, өҫтәл артына тәғәмләнергә ултырғаныбыҙҙа иң элгәре аш-һыуҙы уның алдына ҡуйыр ине. Ә ижадҡа килгәндә, шағирҙар һөйөү-һөйөшөү хаҡында ла яҙа, уларҙың лирик геройҙарының хис-кисерештәре әҫәрҙәрендә сағылыш таба. Әммә ижад емеше менән реаль тормошто бутарға ярамай, шул уҡ шиғриәт үҙе лә мөхәббәт көҙгөһө бит инде. Атайым 1956 йылда яҙған бер шиғырын әсәйемә арнап, "Раузаға" тип исемләгән. Ошо бәләкәй генә шиғыр юлдарында атайымдың әсәйемә ҡарата тәрән хистәре менән бергә йөрәк һағышы ла сағылған:

"Күпме йылдар
инде йөрәтәмен
Һине йөрәгемдә,
Йөрәгемде ҡаты сәнсеү алды
Ҡапыл үткән төндә.
Әллә ауыр ҡайғың
бармы һинең?
Әллә бармы шигең?
Мин ҡурҡтым,
юғалтам тип һине,
Йөрәк ҡуйһа шиңеп".

Әсәйем атайымдан өс йылға алдараҡ баҡыйлыҡҡа күсте. Һөйөкләһен бик тә һағынғандыр ул, юғиһә, уның ҡәләменән шундай хисле, тәрән кисерешле шиғыр юлдары тыумаҫ ине:

"Кескәй генә бер күбәләк ине,
Донъялыҡта донъя йәмләтте.
Тегендә лә һоро шәүлә булмаҫ,
Йәне уның биҙәр йәннәтте".

Ғаиләбеҙҙә атай менән әсәй абруйы, уларҙың бер-береһен хөрмәт итеүе беҙгә генә түгел, Тимербулат улыма ла өлгө булғандыр. Улар ҡатыны Инга менән биш бала тәрбиәләйҙәр. Уларҙың балаларына ла, бер-береһенә лә шул тиклем күркәм мөнәсәбәттә булыуҙарына һоҡланырлыҡ.

Мостай Кәрим башҡорт әҙәби телен үҫтереүгә бик ҙур өлөш индергән шәхестәрҙең береһе. Уның шиғриәте лә, проза һәм драматургияһы ла башҡорт телен бар донъя кимәленә алып сыҡты.

Ғаиләгеҙҙә ниндәй телдә аралаша инегеҙ?

- Атайым башҡорт телендә һөйләшһә, әсәйем уның менән татарса аралашты. Беҙҙең менән башлыса русса һөйләштеләр. Минең үҙемә башҡорт мәктәбендә уҡырға тура килмәне, әммә башҡортса аңлай һәм уҡый алам, тик һөйләшеүе генә ауырыраҡ. Кемдәрҙеңдер саф башҡортса һөйләшкәнен ишетһәм, уларға һоҡланып ҡарайым. Башҡорт шиғриәтен бик яратам. Илгиз ағайым башҡорт телен яҡшы белде, шуға ла һәйбәт тәржемәсе булып киткәндер ҙә инде. Әммә һәр саҡ һүҙлектәр менән файҙаланды, сөнки башҡортса яҙылғанды туранан-тура рус теленә ауҙарһаң, әҫәрҙең йөкмәткеһенә зыян килеүе бар, образлылығы ла аҡһаясаҡ, ти торғайны ул.

Тормоштан йәнә бер хәтирә. Ирем Олегтың өләсәһе һуғышҡа тиклем Харьковта йәшәгән, оккупацияла булған. Ире үлгәс, Украинанан йәйәүләп тиерлек Себер яғына юлланған. Беҙҙә ҡунаҡта булғанда телевизорҙан башҡортса спектаклдәрҙе тыңлай был. Унан һорайым: "Әбей, һеҙ башҡортса аңламайһығыҙ, ул спектаклде ниңә ҡарайһығыҙ?" - тип. Ә ул бына ни тип яуаплай: "Эх, әгәр йәш булһам, башҡорт телен һис шикһеҙ өйрәнер инем. Бик матур бит телегеҙ. Артистарығыҙ ҙа шундай матур уйнайҙар, ҡарағандан ҡарағы килеп тора".

Иремдең бер туғанының Назар исемле ейәне, рус телле ғаиләлә үҫеүенә ҡарамаҫтан, башҡорт телен бик теләп өйрәнә. Телде өйрәткәндә балаларҙы ҡыҙыҡһындыра белеү мөһим. Ә беҙҙә шул етешмәй, киреһенсә, ҡайһы бер ата-әсәләр башҡорт телен инҡар итә. Әлбиттә, был рус телле балаларға башҡорт телен дөрөҫ уҡыта белмәүҙең һөҙөмтәһе. Икенсе бер халыҡтың теле аша уның мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна, тормошҡа ҡарашы ыңғай яҡҡа үҙгәрә бит. Иң элгәре башҡорт телендә дөрөҫ итеп һөйләшергә, ябай ғына итеп булһа ла аралашырға өйрәтергә кәрәк. Башҡорт телен уҡытыу коммуникатив принципҡа ҡоролһа, һөҙөмтә яҡшы булыр ине.

Беҙҙең Мостай Кәрим исемендәге Фондтың да төп маҡсаттарының береһе - башҡорт телен һаҡлап ҡалыу, уны үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Тел - әҙәбиәттең нигеҙе, ә хәҙерге заманда телдәр көрсөккә төшә бара, ныҡ сүпләнә. Шуға күрә был мәсьәлә менән дәүләт тә, йәмәғәтселек тә әүҙем шөғөлләнергә тейеш. Ә заманында милли әҙәбиәттәргә иғтибар ҙур булды, һәр бер халыҡтың күренекле яҙыусыларының, шағирҙарының әҫәрҙәрен бөтөн ил уҡыны. Хәҙер хатта рус классиктары әҫәрҙәрен уҡыусылар, белеүселәр һирәгәйә бара. Шуныһы ҡыуаныслы, Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен, китаптарын республикабыҙҙа бик теләп, яратып уҡынылар, уларға әлеге көндә лә һорау бар, уны йәш быуындарға ваҡытында тапшыра алыу фарыз.

Мостафа Сафа улын дәүләт эшмәкәре булараҡ та беләләр...

- Әлбиттә, Советтар Союзы тигән илдең емерелеүен атайым ауыр кисергәндер, эстән генә һыҙланғандыр, сөнки ул, Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында ҡан ҡойған яугир, илебеҙ азатлығы хаҡына барған яу көндәрендә коммунистар партияһы сафына ағза булып ингән шәхес. Байтаҡ йылдар үҙебеҙҙә лә, Рәсәйҙә лә Юғары Совет депутаты вазифаһын башҡарҙы.

Үҙгәртеп ҡороу тигән сәйәсәт башланғас, беҙҙең өйҙә бер көлкөлө хәл дә булды. Мәктәптән ҡайтып ингән Тимербулат: "Ҡартатай, беҙгә мәктәптә үҙгәрергә ҡуштылар, ә нин үҙеңде үҙгәртерһеңме? - тип һорау биргән. Ә атайымдың үҙ принциптары булды, ул бер ваҡытта ла уларҙан ситкә тайпылманы. Шулай, Башҡортостандағы сираттағы Президент һайлауҙарында Мортаза Рәхимов кандидатураһын хуплап сығыш яһағас, мин унан: "Атай, һин олоғайған кешеһең, ул һайлауҙар ниңә кәрәкме һуң?" - тип һораным. Ә атайым: "Ҡыҙым, мин башҡорт бит, әллә кемдәр ҡулына ҡалмаһын, тип, республикам яҙмышы өсөн мин дә борсолам", - тип яуап ҡайтарҙы.

Мостай Кәрим талантлы балалар яҙыусыһы булараҡ та танылыу тапҡан ижадсы. Ул балалар донъяһын, уларҙың ғәмәли психологияһын шул тиклем оҫта аса белә, уның "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Өс таған", "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" тигән әҫәрҙәрен балалар ғына түгел, ололар ҙа яратып уҡыны. Әйткәндәй, "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса төшөрөлгән "Һеңлекәш" ("Сестренка") нәфис фильмы бөтөн Рәсәй кинотамашысаларын һоҡландырҙы, бик күп кинофестивалдәрҙә призлы урындарға лайыҡ булды.

- Повеста һуғыш ваҡытындағы башҡорт ауылында барған ваҡиғалар һүрәтләнә. Ул үҙенең һуғышта ҡатнашыуы хаҡында күп һөйләмәне, был башҡа фронтовиктарға ла хас күренеш. Әммә уның поэмаларында, шиғырҙарында, повестарында һуғыш темаһы, яугирҙар образы тәрән сағылыш таба. Шул уҡ "Ярлыҡау" повесының сюжеты атайым һуғышта үҙе күргән-кисергәндәр менән бермә-бер бәйле.

"Һеңлекәш" фильмына килгәндә, уны төшөрөү еңелдән булманы. Фильм төшөрөү күп сығымдар талап итә, сценарий ҙа бар, әммә тәүҙә бер нисек тә грант алып булманы. Эш шуға барып етте: фильмдың сценарийын урланылар. Йәнәһе, бер ҡырғыҙ һалдаты украин ҡыҙын ҡотҡарып, үҙенең ауылына ебәрә. Ошо хәл буйынса ғауға булып алды, әммә эш судҡа барып етмәне. Ахырҙа, Рәсәйҙең мәҙәниәт министры бер аҙ аҡса бүлде, Тимербулат улым да Мостай Кәрим исемендәге Фонд аша фильмдың бағыусыһы булды, сығымдарҙың байтаҡ өлөшөн финансланы. Фильмдың режиссеры - Александр Галибин, сценарийын Айҙар Аҡманов яҙғайны, "Мотор Фильм Студияһы" кинокомпанияһы төшөрҙө уны. Оператор Михаил Агранович - иҫ киткес талантлы кеше, фильмдың уңышында уның роле бик ҙур. Төп ролдәрҙе Арыҫлан Ҡырымсурин һәм Марта Тимофеева башҡарҙы, талантлы, даланлы балалар.

Мостай Кәрим үҙенең "Үлмәҫбай" поэмаһы менән рус һалдаты Василий Теркиндың башҡорт аҙашын тыуҙырҙы, тип әйтеп булалыр. Мәктәп йылдарында уны яттан һөйләй торғайныҡ:

"Минең яҙғанды уҡығас,
"Әкиәт", - тимә, ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора..."

- "Василий Теркин" поэмаһын Александр Твардовский 1942 йылда гәзит-журналдарҙа баҫтыра башлап, 1945 йылда тамамлай. Ә атайым уның ижадын ныҡ яратты, һуңынан яҡын дуҫтар булдылар. Атайым "Үлмәҫбай"ҙы 1942 йылда ауыр яраланғандан һуң госпиталдә дауаланып ятҡан сағында яҙа башлап, 1944 йылда тамамлай. Поэма нескә юмор менән һуғарылған, әммә бында башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығына, отҡорлоғона, рух ныҡлығына дан йырлана. Ауыр яраланыуҙан һыҙланып ятҡанында ошондай яҡты, рухлы, юморға бай юлдарҙы тыуҙыра алған атайым. Әлбиттә, атайым да, башҡа совет һалдаттары кеүек, Ҡыҙыл Армияның фашист илбаҫарҙарын еңәсәгенә оло ышаныс менән йәшәгән һәм ижад иткән. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм Бөйөк Еңеүҙән һуң ҡанатланып ижад иткән атайым һымаҡ яҙыусылар һәм шағирҙар үҙҙәренә лә һис бер емерелмәҫ һәйкәл һалды, һәм улар халҡыбыҙ хәтерендә мәңге йәшәйәсәк.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ
әңгәмә ҡорҙо.

Минең үҙемә башҡорт мәктәбендә уҡырға тура килмәне, әммә башҡортса аңлай һәм уҡый алам, тик һөйләшеүе генә ауырыраҡ. Кемдәрҙеңдер саф башҡортса һөйләшкәнен ишетһәм, уларға һоҡланып ҡарайым. Башҡорт шиғриәтен бик яратам. Илгиз ағайым башҡорт телен яҡшы белде, шуға ла һәйбәт тәржемәсе булып киткәндер ҙә инде. Әммә һәр саҡ һүҙлектәр менән файҙаланды, сөнки башҡортса яҙылғанды туранан-тура рус теленә ауҙарһаң, әҫәрҙең йөкмәткеһенә зыян килеүе бар, образлылығы ла аҡһаясаҡ, ти торғайны ул.

✓ *Был һуғыш быға тиклемгеләргә оҡшамаған. Иң мөһиме, паникаға бирелмәҫкә лә абай булырға. Тәүге аҙна-ун көн алйотлоғоң арҡаһында ҡара ҡапсыҡҡа кермәһәң, артабан үҙең төшөнәһең. Һуғышта бөтәһе лә тиҙ, тәжрибә туплау ҙа...*

* * *

"Геродот" позывнойлы Ибраһим һуғышҡа оҙаҡ йыйынды. Тота килеп сығып китерлек йәштә түгел шул. Тамамлайһы эштәре байтаҡ, ослайһы мәшәкәттәре лә күп, Хәйер, үлгәндә лә өс көнлөк эш ҡала, тип халыҡ юҡҡа әйтмәгән. Сәфәренең бер яҡлы ғына булыуы ла бик мөмкин. Шуны күҙ уңында тотоп, бөтөн документтарҙы тәртипкә килтерҙе, васыятын яҙҙы, күрергә теләгән кешеләрен күреп, әйтергә теләгән һүҙҙәрен әйтеп, бурыстарын түләп ҡуйҙы. Бер-бер хәл булһа, ҡатынына, балаларына ауырға төшмәһен өсөн, бер нәмәне лә онотмаҫҡа тырышты. Иң борсоғаны һаулығы ине. Ғүмер буйы, пенсияға сыҡҡас тотонормон, тип иғтибар ителмәгән. Ярай, уҡыусылары менән йөрөгән оҙайлы походтар - тауҙар артылыу, йылғалар буйлап һалда йөҙөүҙәр үтә ҡаҡшап, таралып, йәйрәп китергә бирмәгән. Унан да бигерәк, нәҫелдән күсә килгән ныҡлыҡ, сәләмәтлек йәше өсөн ярайһы, үтә зарланырлыҡ түгел. Тик выжданы туҡтауһыҙ ҡыуалаһа ла, тәүәккәл аҙым яһауҙан нимәләр тотоп тик тора ине. Нимә икәнен үҙе аңлай ул - ҡурҡыу. Күп ҡырлы ҡурҡыу - йәне менән тәне өсөн генә түгел, быныһы тыумыштан һәр йән эйәһендә лә бар. Үтә яуаплы булып, бөтә эште "бишле"гә генә түгел, "плюс бишле"гә эшләп өйрәнгән кеше ғүмер ахырында тормошон өр-яңынан башлауҙан ҡурҡа: әгәр эшкинмәгән һалдат булып, кешеләргә имгәк булып ятһа? Иң борсоғаны шул. Университетта хәрби кафедра булғанлыҡтан, ул бит хатта армияла ла хеҙмәт итмәгәйне.

Бөтөн икеләнеүҙәрен һыпырып ташларға, ғәҙәттәгесә, осраҡлылыҡ ҡотҡарҙы. Элек бер осорҙа уҡыған танышы осраны. Уның "ҡыҙыу нөктә"ләрҙә булғанын, быға тиклем "Вагнер"ҙа йөрөгәнен сала-сарпы ишеткәне бар ине Ибраһимдың. Әле госпиталдән сығып, яраларының уңалғанын көтөп йөрөй икән. Оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Шунда сәйер бер фекер әйтте: "Башта уйыңда үлергә кәрәк, - тине. - Шул ваҡытта ниндәйҙер еңеллек килә - ни булһа ла була... Йәшәүгә сат йәбешеүҙән туҡтайһың, баш яҡшыраҡ эшләй башлай, сөнки инде ҡороштороп алған ҡурҡыу ебәрә. Тимәк, тере ҡалырға шанс арта төшә. Һин хәтерләмәйһеңдер инде. Бер ваҡыт мәктәпкә һуғыш ветеранын осрашыуға саҡырғайнылар. Шунда мин, бер ҡатлы бала: "Ә фронтта ҡарҡыныс булдымы?" - тигән һорау бирҙем. Ә ул, бөтәбеҙҙе лә аптыратып: "Юҡ, беҙҙе барыбер үлтерәсәктәрен белә инек. Бөгөн булмаһа, иртәгә, - тип яуапланы. - Ғәрип булып ҡалыуҙан ҡурҡтыҡ та, пленға эләгеүҙән. Һуғыштың аҙағында ғына тере ҡалырға өмөт уянды". Ғүмерлеккә хәтеремдә ҡалды был һүҙҙәр: "Барыбер үлтерәсәктәр". Мейемдә шул гел шырау ише тора торғайны. Ә бер көндө ҡапыл аңланым: һуң беҙ бит барыбер үләсәкбеҙ. Тыуымдан ҡалмаған, үлемдән дә ҡалмай. - Инде үҙе әллә нисәмә һуғыш ветераны йылмайҙы.

Һүҙҙең иң башта үлемдән башланыуы Ибраһимды айнытып ебәргән һымаҡ булды. Әммә яугир үҙең менән нимәләр алырға, нисек әҙерләнергә кейем-һалым, кәрәк-яраҡҡа күсте: "Хәйер, төрләсә булырға мөмкин. Әжәлде алдап булмай, кемгә һыуҙан үлергә яҙған, шул утта янмай, тиҙәр бит. Нимә булһа ла булыр, тиһең дә, белгәнеңде тырышып эшләйһең, - тип йомғаҡланы. - Был һуғыш быға тиклемгеләргә оҡшамаған. Иң мөһиме, паникаға бирелмәҫкә лә абай булырға. Тәүге аҙна-ун көн алйотлоғоң арҡаһында ҡара ҡапсыҡҡа кермәһәң, артабан үҙең төшөнәһең. Һуғышта бөтәһе лә тиҙ, тәжрибә туплау ҙа...

Тағы ла бер бик мөһим нәмә, - тип дауам итте, - һин унда үҙең өсөн бараһың. Ниндәйҙер эскеме, тышҡымы сәбәптәрең арҡаһында. Был юлды һин үҙең һайлағанһың, бер кем дә мәжбүр итмәгән. Бөтә һөҙөмтәләр өсөн яуаплылыҡты аңлы рәүештә үҙ өҫтөңә алаһың. Ватан алдында бурыс, һәм башҡа тра-ля-ля етди түгел. Бындай яуаплылыҡ иҫән-аман ҡайта алһаң, ғүмерең буйы башҡаларға үпкәләп, хөрмәт көтөп, бахыр булып йәшәмәҫ өсөн кәрәк". Мәйеттәрҙе үҙенең көҙгәләге сағылышына ҡарағанда күберәк күргән тәжрибәле, ҡырыҫ кеше ине ул. Ысын мәғәнәһендә - яу ир.

"Бараһыңмы?" - тип һораны ахырҙа. "Барам", - тине Ибраһим. Шунда ныҡлы ҡарарға килде лә, өҫтөнән тау төшкән һымаҡ булды. Икеләнеү күпме көсөн алып торған икән. Бына шулай килеп эләкте Ибраһим МХО-ға. Йылдан ашыу ваҡыт үтте. Тере әле. Һынатҡаны булманы бығаса. Йәштәрҙән ҡалышҡан мәлдәр ҙә бар, уҙҙырып ебәргән саҡтар ҙа...

"Тарих ҡабатлана", тип уйлай Ибраһим. Улар мәктәптә уҡығанда Донецк ҡалаһындағы "Ҡаһарманлыҡ" клубы эҙәрмәндәре менән хат алышты. Иң тәүге хаттарында: "Улар өҫтә генә ята ине. Трактор ер һөргән ваҡытта береһенең баш һөйәген һабанға эләктергән. Әммә биш һалдаттың бергә ятҡанын аңлап була. Бер һалдат йөҙтүбән ята. Баш һөйәгендә пуля тишеге бар. Аяғында - быйма. Билендә ҡайыш. Патронташында биш патрон ҡалған. Икенсе һалдаттың баш һөйәге икегә ярылған. Уның аяғы аҫтында өсөнсө һалдаттың түше менән ҡулдары... Иң аҫтағы һалдат көрәк өҫтөнә йығылған. Моғайын, был ҡәберҙе унан ҡаҙҙырғандар ҙа, иң беренсе атҡандар. Ҡышҡы кейемдәренә ҡарап, беҙ уларҙы ошо ерҙәрҙә рейдта булған Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарылыр, тигән фекергә килдек. Бер нисәһенең жетоны һаҡланған. Тик, эсендәге ҡағыҙҙар нык иҫкергәнлектән, фамилияларын тулыһынса уҡып булмай..." Тарих уҡытыусылары, ошо рейдта ҡатнашҡан ветеран, был һалдаттарҙың исем-фамилияларын белеүҙә нык ярҙам иткәйне. Уҡытыусыһына ярҙам иткән, хаттар яҙышҡан, аҙаҡтан тарих уҡытыусыһы һөнәрен һайлаған Ибраһим, әле үҙе ошо тупраҡта ята. Бәлки, утыҙ-ҡырҡ йыл ваҡыт үткәс, кемдәрҙер: "Улар алтау булған", - тип яҙыр...

Ә әлегә ҡат-ҡат сорналған баштан ҡан һарҡый. Һыҙланыу елеккә төшә. Моғайын, ярсыҡ яңаҡ һөйәген дә йәнсеп үткән. Ә Ибраһим уйҙары менән аяныс бөгөнгөнән алыҫҡараҡ китергә маташа ла, хәтирәләр һаман һуғыш тирәһендә өйөрөлә. Бынан ҡайҙа ятҡан тыуған яҡтарында ла уның аянысла, ҡайғылы шауҡымы.

...Мәҙәниәт йорто алдына ҡыҙыл келәм түшәлгән. Ҡушарлап ҡуйылған оҙон өҫтәлдә Рәсәй флагы менән ҡапланған табут. Ә уның алдында хәрби кейемдә төшкән ҙур портрет. Малайҙарса мөләйем йөҙ, ирен ситенә ҡунған йылмайыу. Ул етди күренергә тырыша, әммә уйсан ҡарашлы сәгер күҙҙәрҙә паклыҡ менән ихласлыҡ ҡына. Ул һәр ваҡыт уйсан булды. Дәрестә лә, тыңлар-тыңламаҫ кеүек ултыра бирә лә, шундай ҡатмарлы һорауҙар бирә ҡуя. Ә алдап булмай - Ибраһимға йыш ҡына бөтә класс алдында: "Мин был хаҡта бөгөн төплө яуап бирә алмайым. Киләһе дәрескә әҙерләнеп килермен", - тип әйтергә мәжбүр була торғайны.

- Уҡыуға бик етди ҡарай торғайны, "Эҙәрмәндәр" түңәрәгенә йөрөнө. Тарих менән ҡыҙыҡһынды. - Военком менән администрация башлығынан һуң класс етәксеһе сығыш яһай. Күҙ йәштәрен тыйырға тырышында. Ул ҡарашты күтәрә алманы Ибраһим. Кисергеһеҙ ғәйеп тойғоһонан башын аҫҡа баҫты... Таныш ине Ибраһимға был ғәйеп. Бынан күп йылдар элек шаһит булғайны ул бындай ҡарашҡа. 9 Май байрамы ине. Еңеү өсөн йәндәрен фиҙа ҡылған ауылдаштарының исемдәре яҙылған обелиск янында митинг булды. Фронтовиктар сығыш яһаны, уҡыусылар шиғырҙар һөйләне. Тантана бөткәс, бер әбей ветерандар янына килеп: "Ҡалай ҡуҡрайышып торған булаһығыҙ. Һеҙ ҡайттығыҙ. Ә ысын батырҙар - беҙҙең ирҙәребеҙ - яу яланында ятып ҡалды", - тине.

Шунда фронтовиктарҙың береһе ул әбейҙе, ҡаһарман яугирҙың тол ҡалған ҡатынын, ҡосаҡлап иланы. Ә башҡа ветерандар уларҙы уратып, баштарын эйеп торҙо. Күп кеше шаһит булды быға. Икенсе көндө дәрестә Ибраһимдарҙың уҡытыусыһы, ветеран яугир, Александр Твардовскийҙың шиғырын уҡыны:

Я знаю, никакой моей вины
В том, что другие
не пришли с войны,
В том, что они -
кто старше, кто моложе -
Остались там,
и не о том же речь,
Что я их мог,
но не сумел сберечь, -
Речь не о том,
но всё же, всё же, всё же...

"Шулай ҙа, шулай ҙа, шулай ҙа"... - тип ҡабатлағанда, төпкә батҡан күҙҙәренең тәрән соҡоронда бер бөртөк кенә йәш ялтырап китте. Йөрәк ҡағышы һымаҡ сикәне ғүмер буйы сүкеп торасаҡ был әрнеүле хисте йәнә иҫенә төшөрҙө инде Ибраһим. МХО-ға юлланыр алдынан хушлашырға ингәйне уҡыусыһы.

- Ибраһим ағай, - тигәйне ул. - Һеҙ ҡатмарлы һорауҙарҙы беҙгә ябай ғына итеп аңлата торғайныҡыҙ. Әле лә минең һорауым бар. Мин үҙемдең ни өсөн Украинаға һуғышҡа барырға тейешлегемде һаман да нығлап төшөнөп етмәйем. Телевизорҙан да күп һөйләйҙәр. Интернеттан әллә күпме видео ҡараным. Улар кисә генә туғандаш халыҡ ине. Бәләкәй генә сағтан "Беҙҙең өйҙөң йәме"н илай-көлә уҡныҡ. Мин бөгөн ана шул Оксананың ейәндәренә ҡаршы барырға тейешменме? Кем нацист, кем түгел? Ҡайһылайтып айырмаҡ кәрәк? Беҙҙең олатайҙар Бөйөк Ватан һуғышында фашистарҙы бергәләшеп еңгән.

- Нисек белергә? Бергәләшеп фашизмды еңгән ике халыҡтың ҡайһыһы ул Бөйөк Еңеүгә тоғро ҡалды, кем хыянат итте. Донъяны гитлерсыларҙан азат иткән геройҙарға ҡуйылған һәйкәлдәрҙе кем емерә? Гитлер менән бергә һуғышҡан хаиндарҙың исемен кем мәңгеләштерә, урамдарға, мәктәптәргә уларҙың исемдәрен кем ҡуша? Кем Еңеү өсөн ҡорбан иткән һалдаттарҙың аҫыл һөйәктәре ятҡан туғандар ҡәберлектәрен аҡтара? Еңеү килтергән һалдаттың ер ҡуйынындағы һөйәгенә лә сыҙарлыҡ булмағас, уларҙың эсендә нимә ҡайнағанын күҙ алдыңа килтер! Ахыр сиктә, кемдең нимә йырлағанына ҡолаҡ һал: Бөйөк Еңеү йырҙары кемдә ҡалды? Кем ата-бабалары ҡан түгеп яулаған азатлыҡты селтәрле трусикҡа алмаштырҙы?

- Быныһы асыҡланды, - тине егет бер аҙ уйланып ултырғас. - Тағы ла бер һорау: ә ни өсөн бөтә донъя беҙгә ҡаршы, ә уларға ярҙам итә? Берәү генә хаҡ, ә башҡаларҙың нахаҡ булыуы мөмкинме ни?

- Ә ҡасан башҡаса булғаны бар? Гитлер яғында Европаның ун биш иленән үҙе теләп ике миллиондан ашыу кеше һуғышҡан. Европа нимә, әллә ҡайҙа ятҡан бәләкәй генә Таиланд та ситтә ҡалмаған. Һанай китһәң, уйлай китһәң, сәстәр үрә тороpлоҡ. Беҙҙең илдең мәңгелек дошмандары ебәргән ҡорал, аҡса - улар барыһы ла әлеге хыянат хаҡы. Йәһүҙә Искариоттың Ғайса бәйғәмбәрҙе һатҡан утыҙ көмөш аҡсаһы һымаҡ. Ә Оксананың ейәндәре ҡайһы яҡталыр, әйтә алмайым. Яҡшылыҡ тиҙ онотола. Ә бына "Ҡаһарманлыҡ" клубында йөрөп, Башҡорт атлылары дивизияһының хәбәрһеҙ юғалған тип һаналған яугирҙарын тиҫтәләрсә йылдар үткәс табып, хөрмәтләп туғандар ҡәберенә ерләгән егеттәр-ҡыҙҙар Еңеүгә тоғро ҡалғанына иманым ҡамил. Һин уларға ярҙамға бараһың хәҙер.

- Тарих ҡабатлана, булып сығамы инде? Беҙ үткәндә тороп ҡалды тип уйлаған хәлдәр йәнә алдыбыҙға килеп баҫты.

(Дауамы. Башы 14-18-се һандарҙа).

ИЖАДХАНА

МАТУРЛЫҠ - КҮҢЕЛЕБЕҘ ТОРОШО

Быйыл үҙенең матур юбилейын билдәләгән Башҡортостандың халыҡ артисы Миңзилә Ҡотошованың ижади биографияһындағы бер факт һоҡландырыу ҡатыш ғәжәпләндерә мине. Сибай башҡорт дәүләт драма театрында эшләгәндә Урал Ғәлиевтың "Ғәйебем булһа, кисерегеҙ!" драмаһында олатаһының һеңлеһе Ғәззә яҙмышын сәхнәгә алып сығыу бәхете тейә уға.

- Иң иҫтә ҡалған, иң яуаплы, иң тетрәндергән ролем - Ғәззә өләсәйемдең яҙмышын һүрәтләгән Ғәйниса образы, - тип баһалай Миңзилә Ҡотошова үҙе лә. - Ул һөнәри яуаплылыҡ ҡына түгел, туғандарым, балаларым алдындағы яуаплылыҡ та. Героиня һуғыш ваҡытында иренән тәүҙә "пленға эләккән", һуңынан "үлгән" тигән хәбәр ала. Аяуһыҙ һуғыш пленға эләгеп, һатлыҡ йән мөһөрө тағылғандарҙың тол ҡалған ҡатындарына ла аяуһыҙ. Нахаҡҡа ғәйепләүҙәренә, артыңдан бышылдашып тороп ҡалыуҙарына ла, мыҫҡыллы көлөүҙәренә, тел-теш тейҙереүҙәренә лә түҙер инең - аслыҡтан шешенеп, үлем сигенә еткән балалар бар. Уларҙың йәнен һаҡларға кәрәк. Сараһыҙлыҡтың сигенә сыҡҡан Ғәззә (сәхнә исеме - Ғәйниса), балаларын астан үлтермәҫ өсөн, бер-нисә ус бойҙай урлай. Төрмәнән уны балалыҡ дуҫы, һуғыштан ҡулын өҙҙөрөп ҡайтҡан, хәҙер инде колхоз рәйесе булып киткән Һаҙый ҡотҡарып ҡалырға вәғәҙәләй. Алмашына - Ғәйнисаның үҙен һорай. Кейәүгә сығыуҙы ире Мусаға хыянат тип иҫәпләһә лә, йән әрнеүҙәрен эсенә йотоп, яҙмышына риза була Ғәззә-Ғәйниса. Һуғыш тамамланып, донъялар тынысланғандай булғас, әсирлектән ҡотолғандан һуң да байтаҡ һынау-язалар үткәргән, Муса ҡайтып төшә. Ғәйниса менән Мусаның ниҙәр кисергәнен уларҙың тәү осрашҡан урыны - тау артындағы тал ғына белә... Сәхнәлә уларҙың яҙмышын режиссер үҙенсә хәл итте, ә тормошта улар, Ғәйнисаның Һаҙыйҙан тыуған балаһын да алып, Белорет яғына китеп олағалар...

Шулай мин илдә бер сибәр Ғәззә өләсәйемдең яҙмышына яҙған тетрәнеүҙәрҙе йөрәгем аша үткәреп, хәтерен мәңгеләштерә алдым һәм уны үҙ яҙмышыма яҙған миссия итеп ҡабул иттем. Ошо образды сәхнәләштереү өсөн генә булһа ла актриса булыр инем.

➔ Ә нисек актриса булып киттегеҙ? Сәхнәгә һөйөү ҡайҙан һеҙҙә?

- Атайым да, әсәйем дә, артист булмаһалар ҙа, сәнғәткә ғашиҡ инеләр. Атайым Марат Зәйләғи улы шул тиклем моңло йырланы, мәжлестәрҙә уның йырлағанын тын да алмай тыңлай торғайнылар. Ваҡытында уны Мәғәфүр Хисмәтуллин Өфөгә уҡырға ла саҡырған. Әйткәндәй, атайым бөтә уландарына ла үҙе яратып тыңлаған йырсыларҙың исемдәрен ҡушҡан: Илдус, Илфат, Мәғәфүр, Илһам. Беҙҙе бер ҡасан да "Тороғоҙ" тип уятманылар. Таң һарыһынан радионы ҡыҫҡыртып ҡуя торғайны атайым, үҙе лә ҡушылып йырлап ебәрер ине, мәрхүмкәйем. Уның моңло тауышы уята ине беҙҙе. Йәй булһынмы, ҡыш булһынмы - кәртә-ҡура тирәһендә эш менән булғанда ла һәр ваҡыт йырлап йөрөнө. Әсәйем Миңйыһан Сәйетгәрәй ҡыҙы оҫта бейей ине, үҙешмәкәр сәнғәт конкурстарында ҡатнашып, Өфө сәхнәләрен дә яуланы ул. Бәләкәйҙән әсәйем кеүек өйөрөлөп бейергә яратты, ағайҙарым, ҡыҙыҡ күреп, мине төрлөсә ҡыландырып, кистәрен концерт ҡуйҙырта торғайнылар. Көнө буйы радио һөйләп торғас, эш араһында радиопостановкалар тыңлай инек. Үҙем дә ауылда "Мараттың матур ҡыҙы" (атайым мине һәр ваҡыт "матурым" тип яратҡанғалыр, бәләкәйҙән үҙемде шулайтып таныштырғанмын) булып танылғас, уҡырға төшмәҫ элек концерттарҙа бейетә башланылар - тора-бара "артист" булып та танылдым. Клубтағы бер концертты, бер спектаклде ҡалдырмай йөрөнөм. Сибай театры гастролгә килһә, тәүге рәттә ултырып ҡарай инем спектаклдәрен. Сибай ҡалаһының ҡайһы яҡта икәнлеген белмәһәм дә Сибай театры барлығын белә инем. 9-сы класҡа уҡырға Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына киттем. Унда Вилә Ғилми ҡыҙы етәкләгән түңәрәккә йөрөнөм, яуаплы сығыштар алдынан бейеү алиһәһе Рәшиҙә Туйсинанан да һабаҡ алдым, театр студияһында шөғөлләндем. Аҙна һайын театрҙарға йөрөттөләр. Сәнғәт юлы менән китеүем шулай күңел талабына әйләнде.

➔ Тормош иптәшегеҙ ҙә (Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов) сәнғәт кешеһе, хәҙер ул һеҙҙең етәксегеҙ ҙә. Ауыр түгелме?

- Айбулат менән беҙ Өфө сәнғәт институтына уҡырға инеп йөрөгән мәлдә үк танышып, бер-беребеҙгә башты юғалтып ғашиҡ булып, танышҡандан һуң башҡаса айырылманыҡ. Икебеҙҙең дә уҡырға ҡабул ителгәнлекте белгәс, ул мине Ишембай районы Ҡарайған ауылында йәшәгән өләсәйҙәренә ҡунаҡҡа алып китте. Ҡунаҡҡа тип кенә барғайным, үҙем дә аңламайынса, Ҡотошовтарҙың төп йортона килен булып төштөм. Көҙөнә никахлашып ҡуйҙыҡ. Ҡулыбыҙға диплом алғас, ике йәшлек ҡыҙыбыҙҙы күтәреп, Сибайға барып төпләндек. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрында икебеҙ ҙә артист булып эшләп, береһенән береһе матурыраҡ ролдәр ижад иттек. Сәхнәлә ул минең һөйгән йәрем дә, ирем дә, атайым да булды. Һөнәри яҡтан бергәләп үҫеп, байтаҡ тәжрибә туплағас, Сибай халыҡ театрын тергеҙеп, спектаклдәр ҡуйҙыҡ. Сибайҙа матур ғына итеп эшләп йөрөгән ерҙән Айбулатты Ишембай ҡалаһына Мәҙәниәт бүлеге етәксеһе итеп саҡырҙылар. Өс йылдан уны ҡабат Сибайға саҡырып, театр-концерт берекмәһенә етәксе итеп ҡуйҙылыр. Әлеге мәлдә беҙ Салауат башҡорт драма театрында. Бында ла уны директор итеп тәғәйенләгәс күсенеп килдек. Артистар бит былай ҙа тәгәрмәс өҫтөндә, гастролдәрҙә. Икебеҙгә бер арбала еңеләрәк. Аллаға шөкөр, утыҙ өс йыл бергәбеҙ. Өс ҡыҙ, бер ул үҫтерәбеҙ. Бер ейәнсәргә өләсәй-олатайбыҙ инде хәҙер. Тормошобоҙ матур төш кеүек кенә үтеп бара.

➔ Тормошобоҙ матур төш кеүек кенә, тип әйтеүе генә аңһат. Ул матур төш хаҡына ниндәйҙер ауырлыҡтар кисерергә лә, нимәнәндер ваз кисергә лә тура килгәндер?

- Тормош булғас, барыһы ла булды инде. Бала менән уҡыуы ауыр булыр, тип, академик отпуск алырға ҡарар иткәс, төркөмөбөҙ етәксеһе профессор Ғабдулла Ғабдрахман улы Ғиләжев: "Беҙ күмәк бит, ҡыҙым, бергәләп ҡарарбыҙ", - тип, мине ул уйымдан туҡтатып ҡуйҙы. Атайҙарса хәстәрлеге өсөн Ғабдулла ағайға мин әле һаман рәхмәтлемен. Уҡыуға бала менән йөрөгән мәлдәрҙә ҡыҙыбыҙҙы алдына ултыртып, дәрестәр бирә торғайны. Ғөмүмән, уҡытыусыларыбыҙҙан уңдыҡ беҙ. Рәфил Нәбиуллин, Земфира Хөсәйенова, Суфия Ҡорбанғәлиева, Тамара Хоҙайбирҙина, Гөлли Мөбәрәкова, Әхтәм Абушахманов кеүек дәрәжәле уҡытыусыларыбыҙ бала ҡарау менән бәйле проблемаларыбыҙға аңлап ҡараны, кәселекле, кешелекле булды улар беҙгә. Төркөмдәштәребеҙгә лә рәхмәт, Айзиләбеҙ алмаш-тилмәш уларҙың ҡулында йөрөп үҫте. Айбулат эшләп уҡыны. Сессия ваҡыттарында ярҙамға алмаш-тилмәш йә әсәйем, йә ҡәйнәм килеп етә һала торғайнылар. Ә эшләй башлағас, бөтә артистарҙың балалары һымаҡ уҡ, беҙҙең балалар ҙа сәхнә артында үҫте. Оҙайлы гастролдәргә сыҡҡан ваҡыттарҙа ҡыҙыбыҙҙы күп ваҡыт ҡәйнәмдәрҙә ҡалдырҙыҡ, ике генә айлыҡ улыбыҙҙы үҙебеҙ менән ала инек. Улыбыҙҙы, үҙ-ара шаяртып, "гастроль малайы" тип тә йөрөттөк. Ул заманда ҙа ҡунаҡхана тигән нәмә юҡ, айҙар буйы ауылдан-ауылға, фатирҙан-фатирға йөрөйһөң. Имсәк бала менән айлап тәгәрмәс өҫтөндә йөрөүҙең нимә икәнен белһә, артистар ғына беләләр. Артист тормошо ситтән ҡарағанда ғына еңел һымаҡ, ә ул эштең ауырлығын беҙ үҙебеҙ генә беләбеҙ.

➔ Дүрт бала әсәһе, өләсәй булараҡ, әле аңлап баһалаған ҡиммәттәрегеҙ юғарылығынан, туплаған тормош тәжрибәгеҙҙән сығып, артислыҡ карьерағыҙҙан бөтөнләй баш тарта алыр инегеҙме? "Йә сәхнә, йә балалар" тигән талап ҡуйылһа, кем файҙаһына хәл итер инегеҙ ул һорауҙы?

- Ауыр һорау. Нимә тип яуап бирһәм дә уйҙарымды дөрөҫ кенә итеп әйтеп бирә алмам һымаҡ. Балалар тыуа торҙо, үҫә торҙолар. Бөгөн килеп бишәү итмәгәнбеҙ, тип үкенгән саҡтар ҙа бар. Күмәк балалы ғаиләнең үҙ ҡанундары: апайлы-һеңлеле, ағайлы-һеңлеле булыу ҙа матур тойғолар тәрбиәләй бит балаларҙа. Үҫә килә улар бер-береһенә күҙ-ҡолаҡ, терәк-таяныс булырға ла өйрәнде. "Ғаилә менән ижадымды бергә алып бара алырмынмы?" тигән һорау ҙа биргәнем булманы минең үҙемә. Үҙе лә артист булғас, Айбулат мине "йә сәхнә, йә балалар" тигәнерәк һайлау алдына ҡуйманы, сәхнә менән балалар араһында үрһәләнгәндә бала мәшәҡәттәре менән яңғыҙымды ҡалдырманы, донъя мәшәҡәттәрен өҫтөмә өймәне, бала ҡарау булһынмы, кер, иҙән, һауыт-һаба йыуыумы - бөтәһен дә бергәләп эшләнек. Ҡайны-ҡәйнәмдәргә, әсәйемә рәхмәт уҡып бөтә алмайым, үҙ донъяларын икенсе планға ҡуйып, һәр ваҡыт беҙҙең менән булдылыр. Донъя үҙ яйына тәгәрләп китеп тик барҙы. Хәҙер генә артҡа әйләнеп ҡарайым да: "Ике айлыҡ баланы алып, нисек гастролдәргә сығып китә алдыҡ икән, нисек түҙҙек икән?" - тип уйлайым.

Мәсьәләнең тағы бер яғы бар: профессиональ сәхнә һинең оҙайлы ялдарыңды аңламай. Артист һәр ваҡыт формала булырға тейеш. Ул хаҡта уйланмауҙың төп сәбәбе, бәлки, үҙемде сәхнәнән башҡа күҙ алдына килтерә алмауымда ла булғандыр. Артист булырға мин бит үҙемде бәләкәйҙән әҙерләнем. "Мин һәр ваҡыт артистар һымаҡ матур кейенеп, төҙ генә атлап йөрөргә тейешмен", - тип уйлай инем. Үҙ-үҙемде матур итеп ултырырға, "әртистәрсә" көлөргә өйрәткәнем хәтеремдә. Илағанда ла, матур илайыммы икән, тип көҙгөгә ҡарап ала инем. Мине һәр ваҡыт кемдер күҙәтеп тора, тигән тойғо ла бар ине хатта. Шул тойғоноң нимә икәнлеген сәхнәгә беренсе тапҡыр сыҡҡас аңланым: тамашасыны һиҙеү тойғоһо булған икән ул. Үҙем һайлаған һөнәргә шул кимәлдә яуаплы ҡараған килеш мин сәхнәнән баш тарта алмаҫ инем ул, ауыр булһа ла, әле үткән юлымды һайлар инем.

➔ Кескәй генә сағынан "Мараттың матур ҡыҙы" булып танылыу яулаған Миңзилә Ҡотошова сәхнәлә йәмһеҙ булып күренеүҙән ҡурҡмаймы?

- Юҡ, ҡурҡмайым. Артист өсөн матур йә йәмһеҙ булып күренеү түгел, йәмһеҙҙе лә матур итеп уйнау мөһим. Сәхнәлә лә тормоштағы кеүек бит ул: матур булып күренеүе йәмһеҙ булып күренеүгә ҡарағанда күпкә ауырыраҡ. Айырма шунда ғына: йәмһеҙ булһаң да, матур булһаң да, шаршау артына сыҡҡас, һин бит үҙ асылыңа, үҙ булмышыңа кире ҡайтаһың. Тормошта йәмһеҙ булып күренеүҙән ҡурҡырға, йәшәгәс-йәшәгәс, донъяны йәмләп йәшәргә кәрәк. Матурлыҡ - һын-ҡиәфәтебеҙ генә түгел, күңелебеҙ торошо. Күңелебеҙ матур булһын.

Шулай итеп, матур актрисаның ижади яҙмышы ла матур. Ярһыу яҙҙарын артта ҡалдырып, һил йәйенә яңы аяҡ баҫҡан мәле әле Миңзиләнең. Актерҙар өсөн йәшәлгән йылдар һөнәри юғарылыҡ билдәһе түгел. Тәжрибә актерҙарҙы байыта, үҫтерә генә. Йәшнәйһе йәйҙәре, емешле йылдары алда әле, тимәк, тормошон матур төшкә әйләндерә алған актрисаның.

Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА

✓ Балалары атайһыҙ үҫә, йәшләй генә тол ҡалған инәйҙәрем, ирҙәренә тоғролоҡтарын һаҡлап, яңғыҙ ҡартайҙылар... Уларҙың, һуғыш тураһындағы хәтирәләргә бирелеп, илай-илай һөйләшкәндәре бөгөнгөләй күҙ алдымда һаман.

ИНТЕРНЕТТАН

ҠАРА ШОКОЛАД...

холестеринды кәметә, имеш

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһөҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки бының сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй тәьсир итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калориялар йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң ябай һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә "яҡшы" холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм - ҡара, ҡайһылары аҡ шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ҡулланырға ярамай, тип иҫкәртә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ Американың Атланта ҡалаһында йәшәүсе 24 йәшлек Роб Райнхарт исемле программист ашарға әҙерләү һәм уны ашауға киткән энергияны бушҡа сарыф итеүҙән һаҡланыу маҡсатында яңы ризыҡ төрө уйлап тапҡан. Был коктейлдә организм өсөн кәрәкле бөтөн витаминдар һәм минералдар бар. Райнхарт раҫлауынса, эсемлектең тәме яҡшы һәм әлегә алты аҙна эсендә ул уны бер ҙә ялҡытмаған. Шул уҡ ваҡытта, туҡланыу өсөн кәрәкле булған бар элементтар булыуға ҡарамаҫтан, коктейлдә калориялар өс тапҡырға аҙыраҡ. Зәйтүн майы, балыҡ майы, пробиотиктар, антиоксиданттар, олигосахаридтар нигеҙендә яһалған был эсемлек шәкәр һәм фруктозаға ҡарағанда оҙағыраҡ үҙләштерелә. Иң ҡыҙығы, туҡланыуҙың бындай варианты йәш кешегә көнөнә бер нисә сәғәтте һәм айына бер нисә долларҙы һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә икән. Элек ул аҙыҡ-түлек һатып алыу өсөн - 220, ә ашханаларҙа ашау өсөн 250 доллар тотонһа, хәҙер был сығымдар айына 50 долларҙан артмай.

■ Физиологтар ҡатын-ҡыҙ йөрәгендә һөйөү тойғоһо барлыҡҡа килеү серен асыҡлаған. Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери һынауҙар үткәргән. Билдәле булыуынса, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында һөйөү бик тиҙ тоҡана, тимәк, ғашиҡ булыуҙың төп сәбәптәренең береһе булып тышҡы ҡиәфәт тора. Ғашиҡ булыу өсөн ҡатын-ҡыҙ ир-егетте ниндәй итеп күрергә тейеш һуң? Һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән, был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

ХӘТЕРЛӘП...

ОЛАТАЛАРЫ ЯҘМЫШЫН...

бүләләре ҡабатлай

Йылайыр районының йәмле Һаҡмар йылғаһы буйында урынлашҡан Ҡайраҡлы (рәсми исеме Түбәнге Ғәле) ауылынан ер өсөн яңы урынға күсеп сыҡҡан беҙҙең Сәләх ауылынан да Бөйөк Ватан һуғышына ҡырҡлап ир-егет алына һәм, ҡулдарына ҡорал алып, ил һағына баҫа. Уларҙың яртыһынан күбеһенә тыуған төйәгенә әйләнеп ҡайтыу бәхете теймәй - мәңгелеккә яу ҡырында баштарын һалалар... Яуҙа һәләк булған һәм ҡайтып донъя ҡуйған ауылдаштарыбыҙҙың исемдәре ауыл уртаһындағы иҫтәлекле таҡтаташҡа уйып яҙылған. Сәләх халҡы уларҙы йыл һайын ҡәҙерләп иҫкә ала, һәйкәлде тәрбиәләп тоталар.

Һуғыш ғәрәсәттәрен беҙҙең буынға күрергә, үҙ иңдәребеҙҙә татырға яҙманы. Шулай ҙа ауылдаштарым - фронтовиктар Әбделмән Әҙеһәм улы Рәмов (бер туған олатайым), Абдулла, Нотфулла, Йомағужа Вәлиулла улдары Рәмовтар, Кинйәғәле Ғөбәйҙулла улы Аҡҡужин, ғүмерен ауыл балаларына аңбелем биреүгә бағышлаған уҡытыусы Фәйзулла Зәйнулла улы Байсурин, Сәғит Мырҙагилде улы Салауатов, ағалы-ҡустылы Әхмәтсафа һәм Хәмит Заһит улдары Солтановтар һ.б. һөйләүҙәре буйынса уның ниндәй аяуһыҙ һәм үлемесле булыуын яҡшы беләбеҙ. Әле өйләнеп тә өлгөрмәгән йәш кенә егеттәр Йомабай, Хәсәйен, Йәнғәле Рәмовтар үҙ ғүмерҙәрен Ватан азатлығы өсөн ҡорбан итәләр. Олатайҙарым Әхмәтшәкир, Шаһиғәле, Шөғәйеп, Исмәғил, Ғилман Рәмовтар, Фәтхулла Дәүләтҡолов, Зәйнулла Байсурин, Рәхимйән Асайынов, Рәхимйән Иҫәнбаев, Рәхимйән Солтанов, Айнулла Солтанов, Нотфулла Солтанов, Сәмиғулла Солтанов, Яҡуп Солтанов һәм тағы ла күптәр итәк тулы балаларын саға менән оҙатып ҡалған кәләштәре янына ҡайта алмай...

Балалары атайһыҙ үҫә, йәшләй генә тол ҡалған инәйҙәрем, ирҙәренә тоғролоҡтарын һаҡлап, яңғыҙ ҡартайҙылар... Уларҙың, һуғыш тураһындағы хәтирәләргә бирелеп, илай-илай һөйләшкәндәре бөгөнгөләй күҙ алдымда һаман. Аслыҡ-ялаңғаслыҡты ла, эҫе-һыуыҡты ла, юҡсыллыҡты ла күргән инәйҙәрем, йәнкәйҙәрегеҙ йәннәт түрендә булһын! Үгеҙ егеп ер һөрөп, иген сәсеп, ҡышҡы ажғыр бурандарҙа, өҫтөгөҙгә кейергә йүнле кейем булмаһа ла, ҡырҙан колхоз малы өсөн бесән ташып, йәшәргә, үҙ балаларығыҙҙы кеше итергә, аяҡҡа баҫтырырға тырышҡанһығыҙ бит һеҙ! Һеҙҙең алда сал башымды эйәм!

Бөгөн Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының бүләләре олатайҙар яҙмышын ҡабатлай... Украинала барған ҡан ҡойош күпме аҫыл егеттәребеҙҙең ғүмерен ҡыйҙы, йәшлектәренең иң матур мәленән мәхрүм итте... Минең үҙемдең генә алты-ете туғаным ошо һуғышта йөрөй. Яраланыусылары ла байтаҡ араларында. Кис ятһам, иртән уянһам, уларға ғүмер, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләп, аят-доғаларымды бағышлайым. Бер Хоҙайым теләктәремде ҡабул итә күрһен!

Мотал РӘМОВ.
Йылайыр районы Сәләх ауылы.

АТАҺЫНЫҢ КҮСЕРЕ

Һуғыш осоро балаһы ағайым Усманов Тимерғәзим Әһелулла улы 1940 йылдың 20 апрелендә Әлшәй районының Баязит ауылында тыуа. Тәпәй баҫҡан сағында һуғыш башлана. Колхоз рәйесе булып эшләгән атаһы һуғышҡа китә, ҡаты яралана һәм 1943 йылда, таяҡҡа таянып, тыуған яғына әйләнеп ҡайта.

Атаһының ҡайтып инеүен улы Тимерғәзим шулай хәтерләй: "Атайымдың нисек ҡайтып ингәнен хәтерләмәйем. Уның ҡарауы, алған яралары-нан һыҙланыуҙары иҫемдә. Уның әрнеүҙәрен еңеләйтер өсөн беҙ ҙә теште ҡыҫа инек. Еңеү көнөндә кешеләрҙең урам буйлап нисек шатланып йөрөүҙәрен мәңге оноторлоҡ түгел. Беҙ барабан һуғып йөрөнөк. Һуғыштан ҡайтыусы һәр һалдатты ауыл осона сығып ҡаршыланыҡ. Яңы ҡайтыусыны күрмәй ҡалмаҫ өсөн ауыл осонда дежурҙа торҙоҡ. Үҙемде биш йәшемдән алып хеҙмәт кешеһе, колхозсы итеп иҫәпләйем. Киренән колхозды етәкләгән атайымдың күсере булып йөрөнөм. Атайымды көтөп, тырантаста йомолоп рәхәтләнеп йоҡлағаным әле лә хәтерҙә..."

Хеҙмәт биографияһын күсер булып башлаған Тимерғәзим Әһелулла улы атаһы кеүек үк тыуған яғына тоғро ҡала, ауыл хужалығы институтын тамамлай, инженер-механик һөнәрен үҙләштерә, дөрөҫөрәге, атты "ҡорос айғырға" алыштыра. Ун ике йыл "Союз" колхозын етәкләй, күрше райондағы "Миәкә" совхозында директор урынбаҫары булып эшләй. 1987 йылда уны Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин исемендәге колхозға рәйес итеп һайлайҙар. Артабанғы хеҙмәт юлы уның Ҡырмыҫҡалы районы менән тығыҙ бәйле.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, Ҡырмыҫҡалы районы үҙәгендә мәсет һалып, унда имам-хатиб вазифаһын башҡара, меңле ырыуы башҡорттары ойошмаһының дини эштәр буйынса комиссияһын етәкләй.

Ғүмеренең һәр миҙгелендә лә атаһының күсере булараҡ ҡулына алған тормош дилбегәһен һәр ваҡыт ҡулында тота белә хеҙмәт кешеһе. Һәр хәлдә, хеҙмәт тәрбиәһе алғандар һис ҡасан да юғалып ҡалмайҙыр.

Нәфис АҠҠОЛОВ.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

ИКЕ ЯУГИР ДИАЛОГЫ

Мөһабәт һәйкәл янында
Яралы яугир.
Исемһеҙ һалдат рухына
Өндәшә ул - күр:

- Кисер беҙҙе, тыныслыҡты
Һаҡлай алманыҡ,
Һеҙҙең өмөт-хыялдарҙы
Аҡлай алманыҡ.

Һеҙ яулаған Бөйөк Еңеү
Байрағы - ҡулда!
Фашизмға ҡаршы яуҙа
Көрәшә ул да!

Һиңә лайыҡ алмаш үҫте,
Совет һалдаты!
Беҙ еңербеҙ! Һеҙҙең алда
Шул - һалдат анты!

Йәнләнгәндәй кеүек булды
Мөһабәт таш һын:
Изге теләктәрең, яугир,
Бойомға ашһын!

Һин дә кисер! Беҙ ғәйепле -
Булдыҡ аяулы.
Үҙе үлһә лә үлмәй бит
Йылан ҡаяуы.

Ҡоротманыҡ нәҫелдәрен,
Ергә тигеҙләп,
Мәрхәмәтле булдыҡ икән
Ниңә, ни эшләп?..

Ауыр һулап өҫтәп ҡуйҙы:
- Һуң, шулай итһәк,
Фашистарҙан артыҡ булмаҫ
Инек беҙ, тимәк.

Күтәрегеҙ әләм итеп
Бөйөк Еңеүҙе!
Килер ул көн: байрам итер
Халҡым еңеүҙе!

Ҡултыҡ таяҡтарында
Яралы яугир...
Баш эйҙе һәйкәл ҡаршында
Тағы, тағы бер!

Миңнур БАЙҒАРИНА.
Учалы районы Наурыҙ ауылы.

✓ *Алдағы 15-20 йылда кол-үҙәк операторҙары, секретарҙар, тәржемәселәр, бухгалтерҙар, юристар, журналистар, завод эшселәре, курьерҙар, поездар һәм метро машинистары һәм хатта таксистар эшһеҙ тороп ҡалырға мөмкин.*

ЗАМАНСА...

ЯһАЛМА ИНТЕЛЛЕКТ...

кешене алыштыра аласаҡмы?

Башҡортостанда яһалма интеллект мөмкинлектәрен юл хужалығында, медицинала, фәндә, ауыл хужалығында, шулай уҡ енәйәтселеккә ҡаршы көрәштә ҡулланалар. Роботтар яҡын арала кешеләрҙе алыштырасаҡмы? Был һорауға журналист яуап эҙләне.

Яһалма интеллект нимә ул?

Был - компьютерҙың белем алыу, алынған мәғлүмәтте анализлау, ҡарарҙар ҡабул итеү һәм кеше аҡылына хас ғәмәлдәрҙе башҡарыу һәләте. Күп экспертар яһалма интеллекттың яҡын киләсәктә ниндәйҙер һөнәрҙәрҙе алмаштырыуын фаразлай. Дөйөм алғанда, белгестәр фекеренсә, алдағы 15 йылда яһалма интеллект ярҙамында процестарҙы автоматлаштырыу бөтә донъя буйынса һөнәрҙәрҙең 40 процентын ҡыҫырыҡлап сығара ала. Мәҫәлән, Gartner тикшеренеү компанияһы мәғлүмәттәре буйынса, алдағы 15-20 йылда кол-үҙәк операторҙары, секретарҙар, мөрәжәғәттәр менән эшләү буйынса белгестәр, тәржемәселәр, бухгалтерҙар, юристар, журналистар, завод эшселәре, курьерҙар, поездар һәм метро машинистары һәм хатта таксистар эшһеҙ тороп ҡалырға мөмкин.

Кем менән һөйләшәм?

Республикала яһалма интеллектты ҡулланыуҙың иң ябай миҫалы - һаулыҡ һаҡлау министрлығының контакт-үҙәгенең "122" номерында тауыш ярҙамсыһы. Уның менән, моғайын, Башҡортостанда йәшәгән һәр кем һөйләшкәндер. Аҡыллы оператор туғыҙ төрлө сценарий белә, мәҫәлән, яҙҙырыу һәм ҡабул итеүҙе туҡтатыу, табипты өйгә саҡырыу һәм башҡалар. Тауыш ярҙамсыһы яһалма интеллект, телмәрҙе таныу һәм синтезлау технологиялары нигеҙендә эшләй. 2025 йылдың 18 февраленә был линия буйынса 4,8 миллиондан ашыу шылтыратыу килгән, шуларҙың 25 процентын робот башҡарған.

Яһалма интеллект операторҙар эшен кәметергә ярҙам итә, пациенттарҙың эшен тиҙләтә. Әммә был, хәҙер кеше-операторҙар кәрәкмәй, тигәнде аңлатмай, тине Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. Тимәк, төбәк поликлиникаларында медицина теркәүсеһе вазифаһы әлегә бөтөрөлмәгән. "Оператор функцияларын регистратураларҙың штатлы хеҙмәткәрҙәре башҡара. Бәйләнеш үҙәге 2014 йылдан бирле эшләй. Медицина теркәүселәренә башҡа функцияларға һәм бурыстарға ваҡыт бүлеү өсөн 2023 йыл аҙағынан тауыш ярҙамсыһы индерелә, ул мөрәжәғәттәрҙең бер өлөшөн үҙ өҫтөнә ала. Ул бөтә шылтыратыуҙарҙы ла автоном режимда эшкәртә алмай, сөнки төрлө нескәлектәр тыуа. Мәҫәлән, пациенттар төрлө һорау бирергә мөмкин. Был осраҡта тауыш ярҙамсыһы шылтыратыуҙы кешегә күсерә. Шуға күрә тауыш ярҙамсыһы операторҙарҙы алмаштыра тип әйтеү иртәрәк", - тип аңлатты Айрат Рәхмәтуллин.

Яһалма интеллект 64,2 миллион медицина документын өйрәнгән. Ул 98 поликлиника һәм дауахана базаларына инеү мөмкинлегенә эйә. Тәү сиратта Webiomed терапевтар һәм кардиологтар өсөн ярҙамсы булып хеҙмәт итә.

Үткән йылдан алып яһалма интеллект пациенттарҙың рентген һүрәттәрен аса. Башҡортостан "Мосмедия" платформаһын индергән пилот төбәктәр иҫәбендә. Тағы бер программа Башҡортостан медицина хеҙмәткәрҙәренә ЭКГ һәм ҡан баҫымын тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү һөҙөмтәләрен асырға ярҙам итә. Әгәр пациенттың хәүефле патологияһы булһа, система табиптың иғтибарын тиҙ арала дауаланыу кәрәклегенә йүнәлтә. Әммә аҡыллы системалар үҙҙәре анамнезды тулыһынса йыйып, уның нигеҙендә диагноз ҡуя алмай.

Ювелир түгел, ә теүәллек бар

Ете йыл элек Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһында Волга буйы федераль округында беренсе һәм берҙән-бер робот хирургияһы үҙәге асылды. 2018 йылдан үҙәктә уникаль Da Vinci Si робот системаһы ҡулланыла. Бөгөн табиптарға ике "аҡыллы хирург" һәм бер "травматолог" ярҙам итә.

Робот хирургияһының өҫтөнлөктәре: теүәллек, 3D-визуализация, роботтың ҡулы кешелә булғанса ҡалтырамай. Робот системаһы табиптың физик сығымдарын кәметергә һәм операцияларҙы мөмкин тиклем теүәл башҡарырға мөмкинлек бирә.

Күптәрҙе, робот кешене алмаштырырмы, тигән һорау ҡыҙыҡһындыра? Өлөшләтә - эйе. Әммә бөтә ҡарарҙарҙы кеше ҡабул итә һәм бер ҡасан да роботтың интеллекты кеше интеллектынан өҫтөн булмаясаҡ. Робот - ул ауырыу файҙаһына кеше интеллектын дауам итеү сараһы ғына", - тип аңлатма бирә Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының БДМУ ректоры, Рәсәй фәндәр академияһы академигы, профессор Валентин Павлов.

2024 йылда робот хирургияһы үҙәге аша 1000-гә яҡын пациент үткән. Da Vinci si технологияһын ҡулланыу өлкәһе киң: абдоминаль, торакаль һәм колоректаль хирургия, гинекология һәм урология, ҡан тамырҙары хирургияһы. Былтыр "Приоритет 2030" федераль программаһы буйынса БДМУ клиникаһында быуындарҙы алмаштырыу менән шөғөлләнгән робот-травматолог Cuvis Joint барлыҡҡа килде. Робот үҙе компьютер һүрәттәре буйынса эшләй. Хата һәм кеше факторы юҡ.

Һәр һыйырҙы таный

Ауыл хужалығында ла яһалма интеллект ҡулланыла. Мәҫәлән, республика ярҙамы менән Өфөнөң IT-компанияһы мал аҙығы ҡулланыу күләмен контролдә тоткан интеллектуаль система пилот проектын булдырҙы. Системаны Ауырғазы районының ауыл хужалығы предприятиеһында һынап ҡаранылар. Ул мал аҙығы юғалтыуҙы бер ярым тапҡырға кәметергә мөмкинлек бирә. Шулай итеп, 5 мең баш һыйыр булған ферма бер йылда миллион һумлыҡ сығымды ҡыҫҡарта.

Шул уҡ компания менәрләгән баш мал аҫраған ҙур фермала уларҙың һәр береһенең хәлен һәм тәртибен күҙәтеү тураһында уйлана. Шулай итеп, видеокамералар ярҙамында һыйырҙарҙың торошон анализлау проекты барлыҡҡа килә. Эш принцибы ябай. Базаға хайуандар тураһында мәғлүмәт индерелә, шунан һуң камера һәр бер һыйырҙы таный. Билдәле бер ваҡыт арауығында бөтә нәмәне күргән күҙ күпме ашауәсеүҙе, күпме ваҡыт ятҡанын һәм ял иткәнен билдәләй. Әгәр малдың тәртибе көндәлек һәм ғәҙәти тәртиптән айырылһа, система хужалыҡ хеҙмәткәрҙәренә сигнал бирә. Шул саҡта белгестәр килә, улар хәлде үҙ күҙҙәре менән тикшерә һәм баһалай.

Әммә ауыл хужалығы кешеләрҙе технология менән алмаштырыу бурысын ҡуймай. Аҡыллы программа уларҙың эшен еңеләйтә генә. Әйҙәгеҙ, программаны индереүҙе автомобилдәр менән сағыштырып ҡарайыҡ. Һеҙҙең иҫке машинағыҙ бар ине, һуңынан һеҙ технологик яҡтан яҡшыраҡты һатып алдығыҙ. Эйе, ул әле автопилот менән йыһазландырылмаған, әммә юл күрһәтә, дистанцияны контролдә тота. Шулай уҡ фермалар ҙа яңы технология яҡлы, әммә кеше хеҙмәтенән баш тартмай", - тине IT компанияһы етәксеһе Виктор Фрейдин.

Нейроселтәр бөтәһен дә эшләй ала

Яһалма интеллект һөйләгәнде танып, уларҙы текстарға тәржемә итә, команда буйынса теләһә ниндәй һүрәт төшөрә, төрлө ҡатмарлылыҡ, жанр һәм стилистика кимәлендәге текстар яҙа, шиғыр ижад итә һәм уларға музыка һайлай, фотоһүрәттә йәнләндерә. Мәҫәлән, күптән түгел "Манюня: Приключения В Москве" фильмын төшөрөү өсөн нейроселтәр ярҙамында Юрий Никулин легендаһын тергеҙәләр. Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан "Башинформ" Башҡорт кавалерия дивизияһы генералы Миңлеғәле Шаймуратовтың фотоһүрәтен йәнләндерҙе.

Тимәк, тиҙҙән журналистар, рәссамдар, шағирҙар һәм композиторҙар кәрәкмәйәсәкме? Өфө фән һәм технологиялар университеты доценты Айрат Ғәлимов, бындай һығымталарҙы яһарға иртәрәк, ти. Уның билдәләүенсә, нейроселтәрҙәр һөнәрҙәр буйынса имтихан тапшырырға һәләтле. Эксперттар GigaChat селтәренең табиплыҡ эше буйынса имтиханды "дүртле"гә тапшырыуын билдәләне. Әммә нейроселтәр ярҙамында яҙылған текст кеше яҙмаһынан нык айырыла. Кешеләр, "нейронка" ижадын уҡығанда уның яһалма интеллект тыуҙырғанын тоя ала, тип ышана Айрат Ғәлимов. Һүрәт төшөргәндә ҡайһы берҙә мәғәнәһеҙлеккә юл ҡуйыла: кешенең ҡулы йәки аяғы урынына өс ҡул булған һүрәттәр барлыҡҡа килә. Текста ла йыш ҡына хата яһай: уларға телмәрҙә ниндәй ҙә булһа етешһеҙлектәр, акцент, сит тауыштар, күп махсус терминдар йәки сленг булһа, һөйләүсене таныуы ауырыраҡ.

"Нейроселтәрҙәр ҡайһы бер һөнәр эйәләрен алмаштыра алмаясаҡ. Мәҫәлән, элек бухгалтерҙар счет менән иҫәпләгән, хәҙер яһалма интеллект уларҙың эшен еңеләйтә. Әгәр белем биреү өлкәһен алһаҡ, бөтә студенттар ҙа үҙ эштәре өсөн ChatGPT ҡуллана. Уҡытыусының бурысы - уларҙы асыҡлау һәм үҙҙәре эшләһен өсөн ниндәй заданиелар биреү тураһында уйлау. Яһалма интеллект авторҙарҙы, яҙыусыларҙы һәм дизайнерҙарҙы алмаштырасаҡ тип уйламайым. Улар ҙа был нейроселтәрҙәрҙе ҡулланырға өйрәнер. Әммә һөнәрҙәр юҡҡа сыҡмаясаҡ", - тип ышана Өфө фән һәм технологиялар университеты доценты.

Ләйсән ЗАКИРОВА.

УҢЫШ ҠАҘАН

ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

Утыҙ алтынсы хат: "Башҡа илдәрҙең тәбиғәте"

XIX быуаттағы иң яҡшы болгар архитекторы Колю Фичето бер ҡайҙа ла укымаған өсөн дә, бәлки, архитектураны шул тиклем үҙенсә, халыҡсан аңлағандыр. Уның өсөн архитектура тәбиғәт һәм халыҡтың көнкүрешенең дауамы булған. Уның күперҙәренең аркалары һыуҙағы сағылыштары менән бергә камил эллипстар, оҙонса түңәрәктәр, түңәрәктәр генә яһап ҡалмай, ә иҫ киткес һалмаҡлыҡ менән күпер түшәмдәренә күсә, ә төҙөлөштәге бағаналар көмбәҙҙәрҙе күтәреп тороуҙан тыш, уларҙың һынланышын тамамлап та ҡуя.

Донъялағы төрлө архитектурала күпме тыныслыҡ, тынлыҡ һәм һиллек бар, халыҡ архитектураһында хәҙер модалағы "тупаҫлыҡ" һәм урбанистик агрессивлыҡ ни тиклем аҙ!

Үҙебеҙҙең Кавказ аръяғы тәбиғәтенә мөрәжәғәт итәйек. Грузияла кеше мөһабәт тауҙарҙан ышыҡ эҙләй, ҡайсаҡ улар артынан тартыла (Сванетия башнялары), ҡайсаҡ тау вертикалдәренә үҙенең горизонталь торлаҡтары менән ҡаршы тора. Әммә иң мөһиме - Грузияла тәбиғәт шул тиклем ҡеүәтле, хатта ул кеше менән ябай ғына килешеүҙә лә түгел, ә уны ныҡ ҡурсалай, ҡосаҡлай, баһадирҙар рухы өҫтәй.

Грузия тураһында күптәр яҙған. Грузия, уның тәбиғәте һәм халҡы, йолалары һәм тарихы, мәҙәниәте һәм сәнғәте тураһында яҙған XIX быуаттың һәм совет осороноң бөйөк рус шағирҙарын һанап тормайым. Грузияны яратҡандар һәм яраталар. Грузияла кеше һәм тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәттә күҙ алдына килтереү өсөн Н. Заболоцкийҙың бер шиғырын миҫалға килтерәм. Мин был шиғырҙы тулыһынса биргән өсөн уҡыусы һуҡранмаҫ, моғайын. Шиғырҙарҙы ҡыҫҡартыу - ул картиналарҙы ҡырҡыуға бәрәбәр, ә Н. Заболоцкийҙың шиғырын ҡабаттан уҡып сығыу һәр ваҡыт оло ҡәнәғәтләнеү килтерә.

Ночь в Пасанаури
Сияла ночь, играя на пандури,
Луна плыла в убежище любви,
И снова мне в садах Пасанаури
На двух Арагвах пели соловьи.

С крестового спустившись перевала,
Где в мае снег и каменистый лед,
Я так устал, что не желал нимало
Ни соловьев, ни песен, ни красот.

Под звуки соловьиного напева
Я взял фонарь, разделся догола,
И вот река, как бешеная дева,
Мое большое тело обняла.

И я лежал, схватившись за каменья,
И надо мной, сверкая, выл поток,
И камни шевелились в исступленье
И бормотали, прыгая у ног.

И я смотрел на бледный свет огарка,
Который колебался вдалеке,
И с берега огромная овчарка
Величественно двигалась к реке.

И вышел я на берег, словно воин,
Холодный, чистый, сильный и земной,
И гордый пес, как божество, спокоен,
Узнав меня, улегся предо мной.

И в эту ночь в садах Пасанаури,
Изведав холод первобытных струй,
Я принял в сердце первый звук пандури,
Как в отрочестве - первый поцелуй.

Грузия тәбиғәте, ысынлап та, кешене бар ҡеүәте менән ҡабул итә һәм уны көслө, мөһабәт, батыр яһай.

Дмитрий ЛИХАЧЕВ.

19 МАЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 0.15, 0.50, 1.30, 2.10, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Премьера. "Время героев". [16+]
13.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Палач". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.10, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Маня и Груня". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Профилактика.
14.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
14.45, 16.45 Интервью. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Асыш. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башкорттар. [12+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 О чем молчат Памятники. [12+]
21.00 Легенды Урала. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00, 3.30 Күстәнәс. [12+]
23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
0.15 Бәхет иле. [12+]
1.45 Спектакль "Моя семья". [12+]
5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

20 МАЯ
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Палач". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.05, 2.45, 3.05, 3.25, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.10, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Маня и Груня". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Ышан". [12+]
11.00 Из жизни доктора. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Асыш. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байык-2025. [12+]
1.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]
3.15 Әлләсе... [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

21 МАЯ
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Палач". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30, 2.10, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Маня и Груня". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Ышан". [12+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Асыш. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байык-2025. [12+]
1.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]
3.15 Әлләсе... [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

22 МАЯ
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25, 14.15, 19.00, 23.35 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Палач". [16+]
1.00, 1.35, 2.15, 2.50, 3.05, 3.35, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30 Т/с "Дама с собачкой-2". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Поймай меня, если сможешь. [12+]
23.35 Истории Большой Страны. [12+]
0.35 Х/ф "Цена любви". [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Отцы и сыновья. [6+]
10.45, 20.30 Династия чести. [12+]
11.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.30 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.45 Башҡорт йыры. [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15, 4.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
0.00 Ҡурай-шоу. [12+]
2.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]
4.30 Защитники Отечества. [12+]
5.00 Хазина. [12+]

24 МАЯ
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/с "Премьера. "MoneYпуляторы. "От звонка до звонка". [16+]
10.50 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Убойная сила". К 25-летию сериала. [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. Концерт Сосо Павлиашвили "Я люблю тебя". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. "Наша новая музыка". [12+]
0.20, 1.00, 1.40, 2.15, 2.55, 3.35, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Полет птицы". [16+]
0.40 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.30 Аль-Фатиха. [6+]
9.00 Весело живем! [12+]
9.15 Ҡурай даны. [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Асыш. [6+]
11.30 Лит-ра. [6+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.30 Башкорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Все песни о прекрасном... [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00, 5.00 Из жизни доктора. [12+]
19.00 Специальный репортаж гибдд. [12+]
19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Байык-2025. [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 1.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Башҡорт йыры. [12+]
0.30 Концерт ГАСО РБ Рахмаинов-Симфонические танцы. [12+]
2.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
3.45 Ҡурай-шоу. [12+]
5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

25 МАЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
13.05 "Видели видео?" [0+]
14.45 Х/ф "Романс о влюбленных". К 80-летию Евгения Киндинова. [16+]
17.00 Д/ф Премьера. "Её звали Джипси". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Премьера. "Танго на осколках". [18+]
0.00, 0.40, 1.15, 1.55, 2.30, 3.10, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.20 Х/ф "Фото на недобрую память".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Аншлаг и Компания. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "На выдохе". [16+]
3.20 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15, 13.15 Легенды Урала. [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00 Весело живем! [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Интервью. [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
12.00 Атайсал. Знай наших! [6+]
12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
13.45, 14.45 Профессионалы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.15 Спектакль "Живая Земля". [12+]
18.15 Башкортостан #вместе. [12+]
18.45, 3.45 О чем молчат Памятники.
19.15 Әлләсе... [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома.
22.45 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]
1.00 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]
2.45 Колесо времени. [12+]
4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]
4.45 Башкирские каникулы. [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1446 һижри йыл.

Май (Зөлкағиҙә)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалка	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ағшам намаҙы	Йәстү намаҙы
19 (21) дүшәмбе	2:53	5:03	13:30	18:43	21:23	22:53
20 (22) шишәмбе	2:52	5:02	13:30	18:44	21:25	22:55
21 (23) шаршамбы	2:51	5:00	13:30	18:45	21:26	22:56
22 (24) кесе йома	2:50	4:59	13:30	18:46	21:28	22:58
23 (25) йома	2:49	4:57	13:30	18:46	21:30	23:00
24 (26) шәмбе	2:49	4:56	13:30	18:47	21:31	23:01
25 (27) йәкшәмбе	2:48	4:54	13:30	18:48	21:33	23:03

БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.

✓ *Алыҫтағы ауҙы күргәнсе, яҡындағы яуҙы күр.*
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

БАШ ЭШЛӘТМӘК

ТУПРАҠ АЛҺАҠ, ҠАЛАБЫҘ

Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.
Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
Күкрәктәге сәнабыҙ.
Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа ятабыҙ.
Тупраҡ ҡәҙерен аңламау
Беҙҙең өлкән хатабыҙ.
Тупраҡ өсөн яналыйҡ,
Тупраҡҡа шәмдәр һалалыйҡ,
Үҙебеҙҙең инәбеҙҙе
Үҙебеҙгә алалыйҡ!..
Тупраҡ башҡорт бәхетелер,
Бәхетебеҙҙең тәхетелер.
Тупраҡ ҡалһа истиҡбал
Нурлы, раушан, яҡтылыр.

Тулыр илгә батырҙар,
Аҡ шоңҡарҙай аҡындар,
Арыҫландай айҙарҙар
Әйләнеп үк ҡайтырҙар.
Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,
Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.
Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,
Өҙөлмәктер самабыҙ.

Шәйехзада БАБИЧ.



Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.

18-се һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Гвардия. Шаймуратов. Дәрт. Кассета. Маршал. Анонимка. Ажар. Антитеза. Препарат. Свастика. Кусимов. Нафиҡов. Физа. Зарурат. Әлибаев. Кам. Врач. Барокко. Кавалерист. Легионер. Люкс. Иҙел. Йотҡо. Йүгән. Йети. Акрил. Ағас. Разведчик. Айҡан. Ниәт.

Вертикаль буйынса: Танк. Тәкәбберлек. Сафари. Көй. Алиби. Бронкс. Оран. Шашка. Автомашина. Алмас. Карнай. Гимнастика. Ралли. Лавсан. Тракт. Руанда. Тайра. Даян. Арпа. Лайка. Ватан. Нәзиров. Көрт. Ринг. Ручка. Иваси. Часовой. Ҡармаҡ. Андре. Актив. Трюм. Рами.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

22 май "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

21 май "Мин һөйөүҙән яралғанмын". Гөлсөм Бикбулатованың концерты. 6+

22 май "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт" (С.Айтматов, М. Күлбаев), притча. 12+

22 май "Белый ангел с черными крыльями" (Д. Балыко, М. Күлбаев), ҡаласа тарих. 16+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

16 май "Любовное приключение" (В.Аношкин). 19:00. 18+

17 май "Туси-лебеди". 12:00 һәм 14:00. 0+

17 май "Озеро закалдованного коня" (Г. Шафиков). 15:00. 12+

18 май "Волшебник изумрудного города" (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

21 май Ҡурсаҡ театры буйлап сәйәхәт. 18:00. 0+

22 май "Тьма египетская" (М. Булгаков). 19:00. 16+

Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

20 май "Ҡытайҙан һөйөү менән". Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институты студенттары концерты. 12+

22 май 86-сы концерт миҙгелен ябыу. Франциянан Марк Дробинский (виолончель), БДФ-ның камера оркестры, Олег Ҡасимов. 12+

Салауат дәүләт башҡорт драма театры

16 май "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар" (Х.Латыпова, С. Латыпов), музыкаль комедия. 12+

20 май БР Дәүләт ҡурай ансамбле концерты. 12+

22 май "Зәйтүнә" (С. Сурина), драма. 12+

Сибай концерт-театр берекмәһе

19 май "Һаумы, йәй!" МС БАШ төркөмө концерты. 6+

БР Милли музейы

16 май "Эҙләнеү археологияһы: һуңғы һалдат ерләнмәйенсә". Сара. 15:00. 6+

17 май "Өфө - контрастар ҡалаһы" фото күргәҙмәһен асыу. 16:00. 0+

20 май "Бал ҡорттарында ҡунаҡта". Бөтә донъя бал ҡорттары көнөнә ҡарата сара. 16:00. 6+

21 май "Йәш археологтар курсы" сараһы. 15:00. 6+

✓ *Хеҙмәт иткән ваҡыттағы тулҡынландырғыс мәлдәр иҫкә төштө. Ҡарауы еңел булманы, сөнки күп геройҙар күңелемә яҡын. Айырыуса үҙем яҡшы белгән Носорог персонажы иҫтә ҡалды. Батыр йөрәкле шәхес ине.*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

СӘХНӘЛӘ - ЯУГИРҘАРЫБЫҘ

Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында хәҙерге заман геройҙары тураһында "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакле сәхнәләштерелә. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ысын тарихына нигеҙләнеп яҙылған әҫәр буйынса спектакль яугирҙарҙың батырлығына асыҡ дәлил булып тора.

Еңеү көнөнә арналған саралар барышында спектаклде йыл ярымдан ашыу хәрби хәрәкәттәр зонаһында хеҙмәт иткән Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Азат Бадранов та ҡараны. "Фронтта беҙ үлем тураһында һөйләшмәйбеҙ. Гел уйлап йөрөйһөң, әммә һөйләмәйһең. Был насар билдә. Спектакль йөрәккә үтеп инде. Һәр күренеш шәхси ассоциациялар тыуҙырҙы. Хеҙмәт иткән ваҡыттағы тулҡынландырғыс мәлдәр иҫкә төштө. Ҡарауы еңел булманы, сөнки күп геройҙар күңелемә яҡын. Айырыуса үҙем яҡшы белгән Носорог персонажы иҫтә ҡалды. Батыр йөрәкле шәхес ине. Спектаклде төшөрөүселәргә зур рәхмәт, ул бик кәрәк һәм мөһим", - тине Азат Бадранов спектаклдән һуң.

Спектаклдең премьераһы быйыл февраль айында үтте. Сәхнәлә МХО геройҙары, яугирҙары терелә. Бөтә прототиптар ҙа реаль тормоштан алынған. "Герой", "Хакер", "Историк", "Сәсән", "Иман" һәм "Малыш" позывнойлы геройҙарҙың яҙмыштары, тоғролоғо һәм эш-ҡылыҡтары аша һуғыштың ысын йөҙө асыла. Яҙыусы, сценарий һәм ошондай уҡ исемле китап авторы Мөнир Ҡунафин һүҙҙәренсә, спектаклдә Башҡортостан яугирҙарының данлы хәрби юлы сағылдырыла. "Ысын геройҙар рухын, хәрби туғанлыҡты тойҙом, был һуғыштың нисек башланғанын һәм ни өсөн барғанын күрһәтергә кәрәк ине", - тип билдәләне ул.

ҠАНАТЛЫ ГЕНЕРАЛ ТУРАҺЫНДА

Сибайҙа "Ҡанатлы генерал" спектакленең премьераһы булды. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы йылында Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрының баш режиссеры Денис Нургәлин Хәмит Ирғәлин пьесаһы буйынса спектакль ҡуйҙы.

Хәрби драмала генерал-майор, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимовтың тормошо һәм хәрби юлы сағыла. Драманың йөкмәткеһе төп геройҙың тормошон үҙгәрткән ваҡиғалар менән тулы. Артистар геройҙарының хис-тойғоларын еткерә алды, образдар һәр кемгә аңлайышлы, ти спектаклде ҡараған тамашасылар. Башҡорт халҡының данлы улы, һуғыш йылдарында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының беренсе полкы командиры Таһир Күсимов тамашасылар алдында ябай ауыл көтөүсеһенән генерал дәрәжәһенә еткән сағыу шәхес булып баҫты.

Таһир Күсимов ролен - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Сәйфуллин, ҡатыны Сәйҙәне Башҡортостандың халыҡ артисы Айгөл Хәкимова башҡарҙы. Йәш Күсимов образын актер Нәфис Сәйетов кәүҙәләндерҙе. Спектаклгә әҙерлек барышында коллектив геройҙың тыуған яғында - Әбйәлил районының Күсем ауылындағы музейҙа булды. Артистар үҙенсәлекле экспонаттар менән таныштылар. Спектаклдең композиторы - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Урал Иҙелбаев. Хореограф -Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнил Әсәҙуллин, сәхнә биҙәлеше - Рөстәм Баймөхәмәтов.

ЫСЫН БАЙРАМ БУЛДЫ

Өфөнөң Ay Yola төркөмө "Homay" йырына төшөрөлгән рәсми клибын күрһәтте. Был ваҡиға уларҙың ижадын һөйөүселәр өсөн ысын байрамға әүерелде.

Клиптың эксклюзив премьераһы Өфөлә "Тинькофф-холл" алдындағы майҙанда үтте. Уны ҡарарға бик күп халыҡ йыйылды. Клиптың премьераһынан һуң артистар бинаның ҡыйығында өс яңы йырын башҡарҙы. Бынан һуң тамашасылар уларҙан йәнә "Homay" йырын башҡарыуҙы һораны, һәм музыканттар үтенесте кире ҡаға алманы. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, Ay Yola халыҡ-ара танылыу яуланы: уларҙың йырҙары 30 илдең Топ-10 чарттарына инде, ә Shazam сервисында улар Леди Гага һәм Бруно Марс кеүек донъяла билдәле йондоҙҙарҙы уҙып китте.

Яңыраҡ Ay Yola төркөмө музыканттары дәүләт наградалары алды. Был тарихи тантана булды: республикала тәүге тапҡыр коллективтың музыкаль продюсеры, диджей Руслан Шәйхетдинов (DJ Ruslan Sever) "Башҡортостандың атҡаҙанған артисы" исемен алды! Бынан тыш, беренсе тапҡыр атай менән ҡыҙы бер көндә наградаларға лайыҡ булды: Русландың ҡыҙы, төркөмдөң солисы Адель Шәйхетдиноваға ла атҡаҙанған артист исеме бирелде. "Арғымаҡ" төркөмө буйынса билдәле солист Ринат Рамаҙанов "Башҡортостандың халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем менән бүләкләнде.

ЯРАТАМ ТИП ӘЙТМӘНЕМ...

Башҡорт драма театры Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын премьера менән ҡаршыланы. Билдәле башҡорт яҙыусыһы Гөлсирә Ғиззәтуллинаның повесы буйынса "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" спектакле 23 һәм 24 апрелдә сәхнәгә сыҡты. Режиссер Айрат Абушахманов уның жанрын кинодрама тип билдәләй.

"Был спектакль генә түгел, ә мөхәббәт тураһында йөрәккә үтеп инерлек тарих, - ти инсценировка авторҙашы Динара Ҡәйүмова. - Повеста Фәрхинур фронтҡа киткән һөйгән йәренән хәбәр көтөп йәшәй һәм ғүмере буйына уға тоғролоҡ һаҡлай. Уның тарихы -тоғролоҡҡа, рух көсөнә, ваҡыт һәм ара алыҫлығын белмәгән мөхәббәткә гимн. Режиссёр Айрат Әхтәм улы тамашасыға Фәрхинурҙың хис-тойғоларын һәм кисерештәрен еткереү өсөн бик күп көс һалды. Ул тамашасы матур мөхәббәт тарихының һәр һүҙен, һәр минутын йөрәге аша үткәрә алһын өсөн авторҙың һутлы һәм сағыу телен мөмкин тиклем һаҡлап ҡалырға тырышты. Был спектакль бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫ".

Спектаклдең ҡуйыусы рәссамы - Альберт Нестеров, композиторы - Рәмис Хәкимов, хореографы - Ринат Абушахманов, видеорежиссеры - Руслан Юлтаев, яҡтыртыу буйынса рәссамы - Сергей Гаевой, немец теленән консультант - Рәмзиә Латипова. Төп ролдәрҙе Илгизә Ғилманова, Артур Кәбиров, Айҙар Шәмсетдинов һәм башҡа актерҙар башҡара.

ТЕЛһӨЙӘР

ГӘРӘБӘЛЕ ӘНӘЛЕК

Баҡсала эрбет тә, әнәлек тә бар. Әнәлек емешенең ҡан баҫымын дауалауы билдәле. Ә эрбет тәмле һәм файҙалы сәтләүеге менән дан тота.

Әнәлек. 1. "Әнәлек" тип ҡыҙыл йәки һары емешле, эре әнәле ағас, ҡыуаҡты һәм уның емешен атайҙар. Ҡайһы бер ерҙә әнәлекте "дунала", "йәмшегән" тиҙәр. *Әнәлектең емеше өлгөргән. Коштар әнәлекте бигерәк ярата.* **2.** Түшкә ҡаҙай торған биҙәүес, брошканы ла "әнәлек" тип йөрөтөү осрай. *Гәрәбәле әнәлек. Ҡыҙ ынйылы әнәлек таҡҡан.*

Әнәсә - ул бауырһаҡ өсөн таҫма-таҫма итеп теленгән йәки нәҙек итеп йомарланған ҡамыр. *Әнәсә тигеҙ теленгән. Әнәсә ҡатмаһын өсөн тиҙерәк киҫеп, бауырһағын бешерер кәрәк.*

Әҙер йондоҙ тигәндә, Сулпан йондоҙҙо күҙ алдына баҫтырайыҡ. *Күктә әҙер йондоҙо ҡалҡты. Әҙер йондоҙона ҡарап теләк әйтәләр.*

Эрбелсәк. Ҡайын туҙының өҫкө йоҡа ҡатламы була эрбелсәк. *Эрбелсәк һыҙырыу. Малайҙар эрбелсәктән һыҙғыртмаҡ яһай.*

Эрбет - тубырсығында ашарға яраҡлы сәтләүеге булған ылыҫлы ағас; кедр. *Эрбеттең бер нисә төрө бар. Башҡортостанда ла эрбет үҫтерелә.*

Шулай итеп, ошо һүҙҙәрҙән дә әҙер йондоҙҙай матур әнәлек яһап, тел хәтерендә беркетәйек.

НУРБИКӘ әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ЯМАНҒА ЙОҒОНМА...

йоғонһаң - йығылма

Алыҫтағы ауҙы күргәнсе, яҡындағы яуҙы күр.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ер аҫты донъяһында бәләкәй генә кешеләр йәшәй. Уларҙың бәләкәйлеге ер аҫты донъяһының тар булыуынан киләлер. Унда һәр ваҡыт йылы, ләкин яҡтылыҡ юҡ. Был кешеләрҙең бер ваҡытта ла ҡоштар тауышын ишеткәне, саф ел иҫкәнен тойғаны юҡ. Улар күктең ниндәй төҫтә, йәш үләндең ниндәй йомшаҡ икәнен дә белмәй. Улар шулай үҙҙәре өйрәнгән, ҡоро, йылы, ваҡ-төйәк бөжәктәр бимазаламаған урында йәшәй бирә. Саф һауа юҡлыҡтан тын алыуы ауырыраҡ булыуы ла, бер төрлө тәмһеҙ ризыҡ менән туҡланыуҙары ла, йылы һәм болғансыҡ һыу эсеүҙәре лә борсомай уларҙы. Шулай йәшәргә өйрәнгәндәр һәм был уңайһыҙлыҡтарҙы шәйләмәйҙәр ҙә. Хәйер, уларҙы уңайһыҙлыҡ тип тә иҫәпләмәй улар, сөнки сағыштырырлыҡ башҡа донъяны белмәйҙәр бит.

Ә шулай ҙа уларға тегендә, ер өҫтөндә икенсе донъя барлығы тураһындағы хәбәрҙәр ишетелеп-ишетелеп ҡала. Ул донъяла саф ел иҫә, йылы ямғырҙар яуа, һулар һауа, эсер һыу көмөштәй саф, унда йәшел үләндәр үҫә, баш осонда зәңгәр күк аҫылынып тора, имеш. Унда йәшәүселәр төрлө тәмле ризыҡ менән туҡлана. Улар бик күңелле һәм бер ҡайғыһыҙ йәшәй, имеш. Бына бер саҡ ер аҫты донъяһы ҡарттары был имеш-мимеште тикшерергә була. Улар ер өҫтөнә разведчик ебәрә. Разведчик ер аҫтынан Себер үҙгәнә, етмәһә, ҡыштың иң һалҡын, елле-буранлы мәлендә килеп сыға. Һәм көскә-көскә тере ҡала. Өшөп-туңып килеп төшә ер аҫты донъяһына һәм күргәндәре тураһында еткерә: ер өҫтөндә кеше йәшәй алырлыҡ түгел, унда ап-аҡ донъя, һыуыҡ, бер ниндәй йәшеллек тә юҡ... Тимәк, ер өҫтөндәге матур донъя тураһында алдайҙар, шулай булғас, нисек йәшәгәнбеҙ, шулай йәшәүҙе дауам итергә кәрәк, тигән ҡарарға килә ҡарттар.

Ә шулай ҙа имеш-мимештәр тынмаған. Ҡарттар ер өҫтөнә тағы бер разведчик ебәргән. Быныһы иһә Багам утрауҙарына эләккән. Зәңгәр күкте, икһеҙ-сикһеҙ океанды күреп, иҫе киткән бының. Ағастарҙан өҙәлеп төшкән емештәрҙе ашап, тәмле һыу эсеп, йомшаҡ йәшел үләнгә ятып, туйғансы йоҡлаған. Йылы ямғыр тамсыларына уянып киткән. Ер өҫтөндәге донъяға хайран ҡалып йөрөп, ер аҫты донъяһын онота яҙған. Иҫенә килгәс, күп итеп күстәнәскә еләкемештәр алып, үҙ донъяһына ҡайтып киткән. Ә ер аҫтында, туңып үлгәндәр инде, тип, уның ҡайтыуын көтмәгәндәр ҙә. Разведчик ер өҫтөндә ысынлап та йәшел үләп, зәңгәр күк, саф һауа, ә ризыҡтар ағастарҙан ғына төшөп тора икәнен һөйләп биргән, алып ҡайтҡан күстәнәстәре менән һылаған. Аптыраған ер аҫты халҡы. Разведчиктарҙың ҡайһыһына ышанырға белмәгән. Шунан ер өҫтөнә тағы разведчиктарын ебәргәндәр. Берәүҙәр, тәүге разведчик кеүек, ап-аҡ ҡышты һәм һалҡынды ғына күреп ҡайтҡан, икенселәре иһә, тәүгеһе һымаҡ, ерҙең хозур мөйөштәренә эләгеп, ундағы донъяны ожмахҡа тиңләп ҡайтып һөйләгән. Ер аҫты кешеләре шулай төрлө хәбәр ишетеп, икеләнә-икеләнә йәшәүҙе дауам иткән һәм үҙҙәренә шундай һығымта яһаған: ер өҫтөндә йәшәү шулай ҙа ҡурҡыныс һәм хәүефле, ундағы тормош көтөлмәгәнлектәргә бай. Ашаған ризығыбыҙ тәмһеҙ, һулаған һауабыҙ һаҫыҡ, ләкин беҙҙә көтөлмәгәнлектәр юҡ. Иртәгә ни буласағын белеп торабыҙ, ул кисәге көндән айырылмай. Тимәк, ошонда йәшәүҙе дауам итергә кәрәк. Әлбиттә, баяғы имеш-мимештәргә эйәреп, ер аҫты донъяһын ҡалдырып, ер өҫтөнә сығып йәшәүселәр ҙә бар. Улар ҡайһы саҡта ер аҫты донъяһындағы ҡәрҙәштәренә ҡайтып урай, ер өҫтөндәге тормоштоң мөғжизәләре тураһында һөйләй. Алдайҙарҙыр, моғайын..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСИ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
15 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 916